ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

3-9 февраль (шаҡай) 2018

№5 (787)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Криптовалюта...**

Алдаҡмы, әллә киләсәк аҡсаһымы?



5

**Һеңрән һәм терһәк ҡәбиләләре**

Көнбайыш Себерҙә йәшәгән улар



7

**Ҡурайсылар картатаһы -**

Әҙһәм Динислам улы Исҡужин



8-9

**Ситтәр баһалай ҙа ул,**

үҙбаһабыҙ аҡһап китә шул



12-13

**ТВ-программа** 14

*Башҡорттарҙың тәбиғәтендәге батырлыҡ, һуғышсанлыҡ фәҡәт үҙен үҙе һаҡлау ғына булған. Улар һәр ваҡытта үҙҙәрен мәдәфәгә үә химая (һаҡлау һәм яҡлау - С.М.) өсөн генә һуғышҡандар.*

***Сәғит Мираҫ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Янғын хәүефһеҙлеге хаҡында законға төҙәтмәләр раҫланып, иғтибар үҙәгенә тағы ла тәмәкеселәр тәртибе ҡуйылды. Китеп барған поезд һәм башҡа транспорт саралары тәҙрәләренән төпсөк ырғытыу, шулай уҡ баҡса участкаларында сүп-сар яндырыу ҡәтғи тыйыла икәнлекте беләһегеҙме?

***Айҙар РӘХИМЙӘНОВ, янғын һүндереүсе:*** Район үҙәгендә ғүмер буйы ошо һөнәрем буйынса эшләп, әле бына хаҡлы ялға йыйынам. Мин бәләкәй генә саҡта атайымдың ағаһы ауыл пожарнигы булды. Элгәрерәк был һөнәр кешеләренә ҡарата, мәрәкәләп, "эшһеҙгәрим" тигәнерәк мөнәсәбәттә торалар ине, шуныһы ниңәлер хәтеремдә ныҡ ҡалған. Күрәһең, ауыл халҡы ниндәйҙер кимәлдә хаҡлы ла булғандыр, тимен, үҙебеҙҙең әлеге эш күләме менән сағыштырып. Ул саҡ, өлкәнерәк йәштәгеләр хәтерләйҙер әле, янғындар бик һирәк сыға ине, ә инде урман янғыу тигән нәмәне, бәхеткә, бөтөнләй белмәнек тә. Ә ниңә бөгөн донъябыҙҙы ут ялманы һуң беҙҙең? Мин йыш ҡына ошо хаҡта уйланам, аҙна һайын тиерлек булып торған янғын осраҡтарының төрлө сәбәптәрен анализлайым. Тик һорауыма яуап ҡына таба алмайым: ниңә янғындар йышайҙы бөгөн? Йөҙ төрлө сәбәптәрҙән иң асыуға тейгәне - кеше факторы. Йәғни ут һәм электр приборҙары менән уйлап-нитеп тормай, һаҡһыҙ эш итеүселәр, эскеселәр һәм айырыуса тәмәкеселәр - дөйөмләштереп әйткәндә, тәрбиә һәм аң кимәлдәре түбән, әхлаҡһыҙ әҙәмдәр, минеңсә, сөнки көнкүреш янғындарының күпселеге ана шулар арҡаһында килеп сыға. Янғын хәүефһеҙлеге саралары ла күреләә, аңлатыу эштәре лә алып барыла, тик барыбер фажиғәләр ҡабатланып ҡына тора. Республика хөкүмәтенең быйылғы тәүге ултырышында яңғыраған мәғлүмәттәр ҙә шул турала һөйләй. 2017 йылда, мәҫәлән, Башҡортостан буйынса 4 085 янғын сыҡҡан һәм 234 кеше һәләк булған. Ә Яңы йыл байрамының 4 көнөндә: 2017 йылдың 30 декабре - 2018 йылдың 2 ғинуары ғына әле бөтәһе 70 янғын теркәлһә, 4 кеше һәләк булған. Янғындарҙың күпселегендә әлеге лә баяғы кеше үҙе ғәйепле. Ут һәм электр приборҙары менән һаҡһыҙ эш итеүҙәр - төп сәбәп булып тора. Бынан күренеүенсә, бөгөнгө янғын һүндереүселәргә бик теләһәләр ҙә эшһеҙ ултырыу тәтемәй шул. Былтыр йәй ямғырлы булыуҙандыр, күрәһең, урман янғындары ғәҙәттәгенән аҙыраҡ теркәлһә лә, ана шул 38 осраҡтың 31-е яуапһыҙлыҡ арҡаһында килеп сыҡҡан. Шул арҡала 500-ләп кеше административ яуаплылыҡҡа тарттырылған да инде. Рәсәй Хөкүмәте раҫлаған янғын хәүефһеҙлеге законына сираттағы төҙәтеүҙәр бик урынлы булһа ла, тәртипкә күнергә өйрәнмәгән беҙҙең халыҡ, айырыуса тәмәкеселәр, уға иҫтәре китеп барырмы икән һуң? Китеп барған машинанан төпсөк ырғытыу, төкөрөү, сүп-сар ташлап китергә бик оҫтарған бит ул беҙҙең водителдәр. Улар өсөн был ҡылыҡ һауа һулаған кеүек үк тәбиғиләшеп киткән хатта. Уларҙың һәр береһен ҡарап, теркәп тороу ҙа мөмкин түгел. Ә бына ҡалаларҙа күп ҡатлы йорттар янынан үткәндә, ҡайһы бер балкон-лоджияларҙан ырғытылған төпсөктөң башыңа килеп төшөүе лә бик ихтимал бит! Һүндерелмәгән төпсөк аҫҡы ҡаттағы балконға төшөп, күпме янғын сыҡты! Сығып, көйрәтә торған урындарына берәй тәмәке һүндергес һауыт ултыртып ҡуя алмайҙармы икән ни шулар? Закондарҙы яҙалар ҙа ул, тик бына йүнләп эшләмәй шул улар. Үтәлешен тикшереүсе, уның менән ҡыҙыҡһыныусы ла юҡ. Фәҡәт шул яуапһыҙлыҡ әҙемтәләре - ут-ялҡын менән көнтөн, байрам тимәй, ял тимәй, физаҡәр көрәшеүселәр генә бар...

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

# УРАЛ БАТЫРҘЫҢ...

## ҡышҡы уйындары

**Ҡышҡы һабантуймы? Юҡ! Урал батырҙың ҡышҡы уйындары. Исеме үк күптәрҙә бәхәс һәм ҡыҙыҡһыныу уятыр, рухлы сараларға башланғыс бирер оло йыйын ул. Белмәгәндәр өсөн - икенсе йыл рәттән үтә. Белгәндәр өсөн - әҙерлек күптән барҙы.**

(Дауамы 11-се биттә).



12+

✓ Ябайлыҡтары менән бөйөк, ғорур башҡорт инәйҙәре - һуғышҡа китеп ғәйеп булған ирҙәрен, уландарын ғүмер буйы көтә белгән сабыр әсәләр - айырым-асыҡ бер монументаль образдар галереяһын барлыҡҡа килтергән.



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Янғын хәүефһеҙлеге хаҡында законға төҙәтмәләр раҫланып, иғтибар үҙәгенә тағы ла тәмәкеселәр тәртибе ҡуйылды. Китеп барған поезд һәм башҡа транспорт саралары тәҙрәләренән төпсөк ырғытыу, шулай уҡ баҡса участкаларында сүп-сар яндырыу ҡәтғи тыйыла икәнлекте беләһегеҙме?

(Башы 1-се биттә).

***Римма УТӘШЕВА, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты:*** Рәсәй хөкүмәтенең янғын хәүефһеҙлеге хаҡындағы законға индерелгән үҙгәрештәрҙе раҫлауы хуплауға лайыҡ, әлбиттә. Тәмәкеселәрҙең ҡылығы, ысынлап та, йыш ҡына тәртип һәм әхлаҡ сиктәренә һыйғыһыҙ күренеш ала. Былай ярамай икәнлекте бөтәбеҙ ҙә яҡшы аңлайбыҙ. Беренсенән, тәмәке тартыусылар экологияны боҙоп, таҙалыҡҡа зыян килтерә. Был зыяндың һөҙөмтәһен беҙ бигерәк тә яҙ етеп, ҡар ирей башлағас, асыҡ күрәбеҙ: юл һәм тротуар ситтәрендә әллә күпме тәмәке төпсөктәре, шешәләр аунап ята - ҡарауы ҡурҡыныс! Сит илдәргә барып йөрөп ҡайтҡандан һуң, үҙебеҙ ундағы таҙалыҡ хаҡында һоҡланып һөйләйбеҙ, ундағын өлгө итеп ҡуябыҙ, тик ниңә үҙебеҙ ҙә шулай йәшәргә тырышмайбыҙ һуң? Уларҙан беҙҙең ни еребеҙ кәм? Һәр кем үҙ ҡылығын контролдә тотһа, беҙ ҙә таҙа йәшәй алыр инек тә бит.

***Рәйсә ШӘРИФЙӘНОВА, һәүәҫкәр баҡсасы:*** Ер, баҡса участкаларында ҡоро үлән, башҡа сүп-сар яндырыуҙы ике йыл элек үк беҙгә ҡәтғи рәүештә тыйҙылар. Уның өсөн штраф санкциялары, ә бына, Аллам һаҡлаһын, янғын сығып китеп, унан зыян күреүселәр ҙә булһа, ғәйеплене иркенән мәхрүм итеү саралары ҡаралған. Йәй буйына ҡый үләндәре күбәләй өйөлөп китә. Көҙ етһә, шул өйөмгә ҡороған ботаҡтар, ҡойолған япраҡ өҫтәлә. Элек яндыра ла ҡотола инек. Хәҙер рөхсәт булмағас, тәүҙә аптырандыҡ, унан күршеләрҙән күрмәксе, соҡор ҡаҙабыҙ ҙа ҡый үләндәрен шунда күмеп, серетәбеҙ - бына тигән ашламаға әйләнә. Ә ботаҡ-сатаҡты көҙ һыуыҡтар башланғас, мейескә яғабыҙ. Бына шулай йүнен таба ул законды ихтирам иткән, хәүефһеҙлеген ҡайғыртҡан кеше. Тик бына баҡсанан өйгә ҡайтһаҡ, тәмәкесе күршебеҙҙән ыҙа сигәбеҙ. Ул подъезд майҙансығына сығып тартһа ла, лоджияһына сыҡһа ла, төтөнө барыбер беҙгә инеп йонсота: яман еҫкә өйрәнеп тә, йоҡлап та булмай. Әйтеп ҡараһаҡ та, ул әҙәм төкөрөп тә бирмәй һинең законларыңа! Ямалашып, нервы боҙоп, судлашып йөрөгө лә килмәй. Тамам аптыраныҡ - беҙгә ни эшләргә?

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

БЫЛ АЙҘА...

# ШАҠАЙ КӨСЛӨЛӘРҘЕ ЯРАТА





**Шаҡай тыуа. Халыҡ һынамышы буйынса был ай һыуығайҙан байтаҡҡа ҡаты, шаҡылдап, шартылдап торған һалҡындары менән дан алған. Шуға ла, күрәһең, халыҡ февралде үҙенсә шаҡай тип атаған. Ҡыш йылы килгән йылдарҙа ла шаҡай барыбер сая холҡон күрһәтмәй ҡалмай: әсе еле, ҡаты һалҡындары менән шаҡ ҡатыра. Февралдә һыуыҡ: "Һыйыр мөгөҙөн һындырыр инем дә, көнөм ҡыҫҡа", - тип әйтә, имеш, ти торғайны әсәйем. Быйыл нисек булыр - уныһын тиҙҙән күрелер.**

Ә бына холоҡ, характер, тигәндән, бер ғәжәйеп үҙенсәлеге менән дә айырылып тора был ай. Иғтибар иткәнегеҙ бармы икән, февраль - көслө шәхестәр йондоҙлоғо ла бит! Тап характер көсө менән өлгәшәлә инде кеше был донъяла үҙ алдына ҡуйған бөйөк маҡсаттарына. Аҡыллы, принципиаль, ғәҙел һәм лидерлыҡ сифаттары менән билдәле бик күп талантлы шәхестәр тап ошо айҙа тыуғандар. Улар бик күп, ләкин быйылғы календарь шаҡайҙа түңәрәк юбилейҙарын билдәләгән һыуғоярҙарҙың исемлеген генә теҙеп сыҡҡан. Шуға күрә, һүҙебеҙ улар хаҡында ғына барғанға башҡа һыуғоярҙар үпкәләмәҫ, тип ышанабыҙ.

Исемлекте быйыл тыуыуына 145 йыл туласаҡ бөйөк һәм илаһи тауыш эйәһе **Федор Шаляпин** башлап ебәрә **(1 февраль)**. Ҡаҙанда тыуып үҫһә лә, унда итексе ярҙамсыһы булып эшләп, сиркәү хорында йырлап йөрөгәндән һуң, Өфөгә килеп, донъя сәхнәһенә тәүге аҙымдарын ул беҙҙә башлай. Тап Өфө осоро легендар йырсының ижадына ҡанат ҡуйып, уның үҙ-үҙенә ышанысын нығыта. Баш ҡалабыҙҙың ҡасандыр ул йәшәгән Гоголь урамындағы 1-се йортта Ф.Шаляпиндың музейы асыласаҡ, тиҙәр. Ошо уҡ көндә өлкән ҡәләмдәшебеҙ - журналист, тарихсы, байтаҡ йылдар Республика Хәрби дан музейында көс түккән **Фәрит Вахитов** үҙенең 85 йәшен билдәләй. Ә бына **3 февралдә** арҙаҡлы замандашыбыҙ, билдәле дәүләт һәм хужалыҡ эшмәкәре, яңырыу осороноң ҡатмарлы йылдарында Сибай ҡала хакимиәте башлығы булып эшләгән, артабан БДУ-ның Сибай институтын уңышлы етәкләгән иҡтисад фәндәре докторы, профессор, техник фәндәр кандидаты **Зиннур Йәрмөхәмәтов** үҙенең 70 йәшен билдәләй.

Шаҡай титандарының тағы береһе - үҙе иҫән сағында уҡ донъя сәнғәте кимәлендә билдәлелек яулаған бөйөк рәссам, сығышы менән Әбйәлил районынан булған **Әхмәт Лотфуллин**. **4 февралдә** уға 90 йәш тулған булыр ине. Илһөйәр талант эйәһенең төп ижад темаһы - башҡорт халҡының тарихы, көнкүреш философияһы, баҫалҡы хеҙмәт батырҙары, ябай кешеләр һәм билдәле замандаштар портреттары. Шулар араһында быуындар күсәгилешлеген сағылдырған һәм ябайлыҡтары менән бөйөк, ғорур башҡорт инәйҙәре - һуғышҡа китеп ғәйеп булған ирҙәрен, уландарын ғүмер буйы көтә белгән сабыр әсәләр, тоғро ҡатындар образдары - айырым-асыҡ бер монументаль образдар галереяһын барлыҡҡа килтергән.

Башҡортостаныбыҙ ере иҫ китмәле талантдарға бай: шағирҙар,

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Юғары иҡтисад мәктәбе" милли тикшеренеү университетының Бойондороҡһоҙ социаль сәйәсәт институты ғалимдары Лилиә Овчарова һәм Наталья Зубаревич менән осрашты. Улар һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, ғаилә, хеҙмәт һәм мәшғүллек күҙлегенән сығып республикала кеше потенциалын үҫтереүҙе тикшерҙе. Осрашыу барышында берлектәге аналитик эш буйынса тәҡдимдәр яңғыраны. Республика быға ҙур ҡыҙыҡһыныу белдерә, тине төбәк етәксеһе.

✓Башҡортостанда һаулыҡ һаҡлау министрының беренсе урынбаҫары тәғәйенләнде. Ул - оҙаҡ йылдар Республиканың СПИД-ты һәм йоғошло ауырыуҙарҙы иҫкәртеү һәм уларға ҡаршы көрәш үҙәгенең баш табибы булып эшләгән Рафаэль Яппаров. Яппаров Рафаэль Ғәли улы 1975 йылда тыуған. 1998 йылда Башҡорт дәүләт медицина институтын, Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлаған.

✓Өфөнөң Киров районында яңы прокурор тәғәйенләнде. Рәсәйҙең Генераль прокуроры бойороғо менән хәҙер ошо вазифаны юстиция өлкән советнигы Илһам Хәбибуллин башҡара. 2012 йылдың февраленән 2018 йылдың ғинуарына тиклем Кушнаренко районы прокуроры вазифаһын башҡарған.

✓Башҡортостан хөкүмәте бойороғо менән Венер Вәхитов республиканың урман хужалығы министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Ул урмандарҙы файҙаланыу, тергеҙеү һәм ер мөнәсәбәттәре мәсьәләләре өсөн яуаплы. Венер Фәнир улы Вәхитов быға саҡлы Башҡортостан Урман хужалығы министрлығының хоҡуҡи һәм кадрҙар эше бүлеге начальнигы булып эшләгән.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Радик Юлбаевты республиканың Йәмәғәт палатаһы аппараты етәксеһе итеп тәғәйенләне. Икенсе указ менән төбәк башлығы үҙ теләге буйынса Йәмәғәт палатаһы аппаратының элекке етәксеһе Тимур Ҡасимовты вазифаһынан бушатты.

✓Башҡортостандың Өфө районында "Миловка паркы" торлаҡ комплексы төҙөлөшө тергеҙелде, тип хәбәр иттеләр республиканың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетынан. Подряд ойошмалары тәү сиратта фатирҙарҙағы эшкә тотонған. Бынан тыш, дөйөм файҙаланыу урындарында етешһеҙлектәр тикшерелә, төҙөлөш һәм биҙәкләү материалдары килтерелә.

✓ *Иң мөһиме - Башҡортостанда йәшәмәһә лә, башҡорт булыуҙан туҡтамаған, халҡы өсөн ҡулынан килгәнде атҡарған шәхес бит ул! Уның күп хеҙмәттәре үҙе иҫән сағында уҡ баҫылып сыға.*



рәссамдар, йырсылар, бейеүселәр, ҡурайсыларыбыҙ ифрат күп бит беҙҙең. Бар микән Ер йөҙөндә тағы ла шундай бер серле төбәк! Әйткәндәй, тәбиғәт, ер-һыу гүзәллектәре генә түгел, халҡыбыҙ күңеле, уның рухи хазиналары - башҡортлоҡ тарта һәм илһамландыра, күрәһең, ижадсыларҙы. "Башҡортлоҡ - ул милләт кенә түгел, Ҡурай кеүек ябай, ҡатмарлы", тигән бит халыҡ шағиры Назар Нәжми ҙә. Әйткәндәй, **5 февраль** быйыл иҫтәлекле даталарҙың береһе. Әҫәрҙәре башҡорт поэзияһының алтын фондына ингән күренекле шағир, Салауат Юлаев исемендәге БАССР премияһы лауреаты **Назар Нәжмиҙең** тыуыуына 100 йыл тула. Ошо уҡ көн халҡыбыҙҙың тағы бер ҡаһарман шәхесе - сығышы менән Учалы районы егете, Советтар Союзы Геройы, яуҙаштарының ғүмерҙәрен һаҡлап, хәл иткес мәлдә дошман амбразураһын күкрәге менән ҡаплаған һәм совет ғәскәрҙәренең әүҙем һөжүмгә күсеүен тәьмин иткән **Шәкирйән Мөхәмәтйәновтың** (Александр Матросов) тыуыуына - 95, ә тарихта тәүге тапҡыр шундай ҡаһарманлыҡҡа аҙым яһап һәләк булыуына 75 йыл тула (1923-1943). Фиҙаҡәр журналист һәм яҙыусы, үҙе лә Учалы районынан булған мөхтәрәм ҡәләмдәшебеҙ Рәүеф ағай Насиров был батыр яҡташының нәҫел тамырҙарын барлап, ил буйынса уның эҙҙәрен юллап, ерҙәшен күреп-белгән кешеләр иҫтәлектәрен һөйләтеп, архивтар һәм экпертизалар аша үтеп, документаль рәүештә Матросовтың башҡорт егете Шәкирйән Мөхәмәтйәнов булыуын иҫбатланы һәм ошо тикшеренеүҙәре һөҙөмтәһендә "Ҡайҙан һин, Матросов?" тигән китап яҙып, был фактты юғарылағылар һәм тәкәбберҙәр әллә ни танырға теләмәһә лә, халҡыбыҙ алдында ҙур ҡаһарманлыҡ эшләп китте...

Шаҡайҙың шәхестәр йондоҙлоғо былар менән генә бөтмәй әле. **7 февраль** күп яҡлы талант эйәһе - табип, медицина фәндәре докторы, шул уҡ ваҡытта башҡорт тел ғилеме буйынса тикшеренеүсе филолог, дәүләт эшмәкәре, 1919 йылда Башҡортостан хөкүмәте рәйесе, Башҡортостан хөкүмәтенең үҙәк Совет власы менән Башҡортостан Автономияһы тураһында һөйләшеүҙәрендә һәм Килешеүгә ҡул ҡуйыуҙа ҡатнашҡан делегацияның етәксеһе булған **Мстислав Ҡулаевтың** тыуыуына 145 йыл тула (1873-1958). Мөхәммәтхан Сәхипгәрәй улы сығышы менән үҫәргән башҡорттарынан. Ул Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районының Ейәнсура ауылында тыуған. Ырымбур гимназияһын тамамлағас, Ҡаҙан университетының медицина факультетында уҡып, табип һөнәренә эйә була. Мәскәүҙә тарихи миссияны башҡарып ҡайтҡас, ул Ҡаҙандағы ғаиләһе янына килә һәм оҙаҡ ҡына тиф менән сирләп ята. Һауыҡҡас, шунда йәшәргә тороп ҡала һәм хәүефле сәйәсәттән баш тартып, үҙен тулыһынса ауырыуҙарҙы дауалауға, ә буш ваҡыттарын башҡорт теле буйынса фәнни хеҙмәттәр яҙыуға бағышлай. Шул арҡалалыр ҙа, бәлки, Сталин золомо ҡырғынынан иҫән ҡала Ҡулаев. Ә бәлки, исем-шәрифен үҙгәртеү ҙә ярҙам иткәндер? Сөнки ғәжәп хәл бит - нисек инде шундайын да берәгәйле шәхес - Башҡорт милли хәрәкәте лидерҙарының береһе, белемле, юғары мәҙәниле был шәхес репрессия ҡойононан арҡаҙаштарынан бер үҙе тигәндәй тороп ҡала! Әйткәндәй, исем-шәрифен ул 1896 йылда уҡ, Ҡаҙан университетына христиан булмағандарға юл ябыҡлыҡтан, йәғни сараһыҙҙан үҙгәртергә мәжбүр була. Белемгә һөйөүе шул тиклем көслө булғанмы, әллә мәрйә кәләшенәме - униһы беҙгә ҡараңғы. Иң мөһиме - Башҡортостанда йәшәмәһә лә, башҡорт булыуҙан туҡтамаған, халҡы өсөн ҡулынан килгәнде атҡарған шәхес бит ул! Уның "Башҡорт теле өндәре", "Башҡорт алфавиты", "Башҡорт телендә ҡылымдар хаҡында" һәм башҡа хеҙмәттәре үҙе иҫән сағында уҡ баҫылып сыға. "Башҡорт теленең үҫәргән һөйләше синтаксисы", "Башҡортса-русса һүҙлек" кеүек хеҙмәттәре иһә, үкенескә, ҡулъяҙма рәүешендә баҫылмайынса ҡала. М. Ҡулаев 1958 йыл вафат була, Ҡаҙанда ерләнгән. Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуға 100 йыл тулыуҙы билдәләгән мәлдәрҙә Өфөлә һәм шәхесебеҙҙең тыуған яҡтарында Мөхәммәтхан Ҡулаевтың исемен мәңгеләштереү буйынса ҡыйыуыраҡ саралар күрелһә, тарихи ғәҙеллекте һанлаусы сауаплы ғәмәлдәрҙән булыр ине был изгелек.

Быуаттар төпкөлөндә йәшәһә лә, рух көсө һәм ижад ҡомары менән замандашыбыҙға тиң күрелгән, исеме быуаттар буйы халыҡтар күңелендә ҡәҙерләп һаҡланып килгән шағир һәм мәғрифәтсе, төрки әҙәбиәтенең үлемһеҙ шиғри өлгөһө "Ҡисса-и Йософ" әҫәре авторы, әйле ырыуы башҡорто **Ҡол Ғәлиҙең** тыуыуына **14 февралдә** 835 йыл тулыуҙы билдәләйәсәкбеҙ (1183-1336).

Иншалла, бөгөн арабыҙҙа йәшәп, **9 февралдә** оло юбилейы - 80 йәшен ҡаршыларға әҙерләнеүсе арҙаҡлы бер замандашыбыҙ исемен атап китеү ҙә фарыз. Ул замаһында ябай механик булып эш башлап, республикабыҙҙың дәүләт һәм хужалыҡ эшмәкәре дәрәжәһенә күтәрелгән, ләкин милли асылына һәм юғары кешелек сифаттарына тоғро ҡалған күркәм, баҫалҡы шәхестәребеҙҙең береһе, иҡтисад фәндәре кандидаты, 1971-1978 йылдарҙа "Баштрансгаз" берекмәһе директоры, унан һуң БАССР Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары булып эшләгән **Фәнис Исхаков.** Рәсәйҙең почетлы газ сәнәғәте хеҙмәткәре шул уҡ ваҡытта бокс буйынса СССР-ҙың спорт мастеры ла, бәхетле ғаилә башлығы һәм ҡартатай ҙа ул.

**15 февралдә** тау инженер-геологы, академик, СССР-ҙың Дәүләт премияһы лауреаты **Басир Мәһәҙиевтың** (1933-2014) тыуыуына - 85 йыл; **18**-ендә журналист һәм яҙыусы, заманында оҙаҡ йылдар "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире булып эшләгән **Әмир Гәрәевтың** (1928-2008) тыуыуына - 90 йыл; **23**-ө Башҡортостандың халыҡ шағиры, драматург **Әнғәм Атнабаевтың** (1928-1999) тыуыуына - 90 йыл һәм билдәле драматург, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә Рәсәй премияһы лауреаты **Флорид Бүләковтың** (1948-2015) тыуыуына 70 йыл тула икәнлеген дә белеп ҡуйығыҙ.

**Иҫтәлекле көн һәм байрамдар:**

**2 -** Сталинград һуғышында совет ғәскәрҙәренең немец-фашист илбаҫарҙарын тар-мар иткән көнө (1943).

**4 -** Яман шеш сирҙәре менән Бөтөн донъя көрәш көнө.

**8 -** Рәсәй фәне көнө.

**9 -** Халыҡ-ара теш табиптары көнө.

**11 -** Ҡышҡы спорт төрҙәре көнө.

**12 -** Славяндарҙың Масленица байрамы.

**13 -** Бөтөн донъя радио көнө.

- Бөтөн донъя интернет хәүефһеҙлеге көнө.

**14 -** Ғашиҡтар көнө

- Компьютерсы көнө

- Халыҡ-ара китап бүләк итеү көнө

**16 -** Көнсығышта Яңы һары Эт йылы башлана

**17 -** Бөтөн донъя изгелек ғәмәле көнө.

**20 -** Бөтөн донъя социаль ғәҙеллек көнө.

**21 -** Халыҡ-ара туған тел көнө.

**23 -** Ватанды һаҡлаусылар көнө.

- 16-сы гвардия Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры генерал-майор М.М. Шайморатовтың батырҙарса һәләк булыуына - 75 йыл (1943).

**25 -** Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагы көнө (1992).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР




# КҮҘӘТЕҮҘӘР

***35-се күҙәтеүем.*** Дуҫтарымды бер көлдөрөп алайым әле. Мин "Киске Өфө"лә эшләгәндә Рәдиф ағай Тимершин (былтыр 2 майҙа вафат, ҡараңғы гүре яҡты булһын) офисы күршелә генә урынлашҡан "Өмөт" гәзитендә хеҙмәт итте. Икәүләп ишек алдында һөйләшеп торһаҡ, беҙҙә эшләүсе Әминә апай Имашева редакцияға инеп бара. Бер ҡулындағы шыптыр эсендә 3 помидор күренә, икенсе ҡулына икмәк тотҡан. Рәдиф ағай Әминә апайға арнап шиғыр ҙа сығарҙы:

*Өс помидор тотҡан бер һылыуҙы*
*Осраттым мин яҙмышым юлында...*
*Һәм әпәй ҙә бар ине ҡулында...*

***36-сы күҙәтеүем.*** Балаларға бәйле көләмәстәрҙә тәбиғәттең үҙе кеүек үк ябайлыҡ, бер ҡатлылыҡ, эскерһеҙлек бар. Балаларымдың сабый саҡтарына бәйле ҡыҙыҡлы хәлдәрҙе иҫкә төшөрҙөм әле.

Өлкән улым Әмир яңы теле асылып килгәндә балалар баҡсаһының тәрбиәсеһе менән "Зоя Андреевна, досвидание!" тип хушлашыр урынына: "Зандина, тистәнәли!" тип һаубуллаша торғайны.

Әбйәлил улым йүргәктә саҡта төндә һәйбәт йоҡлаһын өсөн кис подъезд алдына алып сыға инем. Күрше йортта йәшәүсе татар егете лә ҡыҙын алып сыға. Бер көн ул улымдың исемен һорай ҡуйҙы.

- Әбйәлил, - тинем мин уға.

- Ғәбжәлил, син бит аңа район исемен ҡушкансың, - ти был.

- Юҡ, ул кеше исеме. "Әбйәлил" тигән башҡорт халыҡ әкиәте лә бар. Етмәһә, әсәһе Әбйәлил районынан, - тием мин.

- Бә-ә-ә-й... Минем хатын Кушнареннан, улым тыуса, мин дә Кушнарен тип кушам, - ти атай кеше.

***37-се күҙәтеүем.*** "Юлдаш" радиоһы егеттәре "Әгәр ҙә һуғыш булмаһа..." тигән темаға һөйләшеү ойошторҙо. Тарих теләк-шарт һөйкәлеше ҡағиҙәһенә буйһонмай, тиҙәр. Шуға күрә был һуғышты беҙ бер нисек тә урап үтә алмаҫ инек, тип тә уйлайым. Икенсе яҡтан ҡарағанда, был һуғыш атом ҡоралының тиҙерәк барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ иткәнен дә оноторға ярамайҙыр. Шул уҡ ваҡытта, һуғыш был ҡоралды Германия фашизмы тарафынан ҡулланыуҙы сикләй. Өсөнсөнән, американдар Япония ҡалаларында ҡоралды файҙаланып, был трагик тәжрибә атом һуғышының ҡот осҡос эҙемтәләрен бар донъяға фаш итеп, кешелекте атом һуғышынан аяп тора. Тик бының өсөн Хиросима һәм Нагасаки халҡы "тәжрибә ҡуяны" ролен уйнарға тейеш инеме? Был яҡтан ҡарағанда, Икенсе донъя һуғышы донъяны юҡҡа сығарырға һәләтле булған Өсөнсө бөтә донъя атом һуғышын иҫкәртә.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Владимир Путин ҡоралды көстәрҙең эске хеҙмәт уставына үҙгәрештәр индерҙе. Хәҙер хәрби хеҙмәткәрҙәре командирҙың рәхмәт һүҙенә йәки ҡотлауға "Рәсәй Федерацияһына хеҙмәт итәм" (2008 йылда ҡабул ителгән) урынына "Рәсәйгә хеҙмәт итәм" тип әйтергә тейеш. Ҡыҙыл армия һалдаттары быңдай осраҡтарҙа 1924 йылда - "Хеҙмәт халҡына хеҙмәт итәм", 1937 йылда - "Советтар Союзына хеҙмәт итәм", 1994 йылда - "Ватанға хеҙмәт итәм", ә батша армияһында "Тырышырға шатмын" тип яуаплаған булған.

✓ Башҡортостандың төп медицина учреждениеларына яңы реанимобилдәр партияһы килде. Республика балалар клиник дауаханаһына һәм Ҡыуатов исемендәге республика клиник дауаханаһына өсәр махсус автомобиль бирелде, ике машина 17-се ҡала балалар дауаханаһына йүнәлтелде. Нәҡ ошо ойошмаларҙа республиканың Санитар авиацияһы хеҙмәте эшләй. Һигеҙ реанимобилдең хаҡы - 58 миллион һум, улар республика ҡаҙнаһы иҫәбенә һатып алынған.

✓ Хәҙер Өфөнән Мәскәүгә 2,5 мең һумға осорға мөмкин. Осоштар менән яңы авиакомпания - "Комиавиатранс" шөғөлләнә. Яҡындағы осош 13 ғинуарға билдәләнгән, өфөләрҙе "Домодедово" аэропорты көтә. Популяр йүнәлеш буйынса осоштар аҙнаһына бер тапҡыр башҡарыла. Шәмбе көндәрендә Embraer ERJ самолеты Өфөнән иртәнге 6-сы 10 минутта оса. Кире йүнәлештә рейстар йәкшәмбегә, киске сәғәт 10-ға күҙалланған.

✓ Башҡортостанда Рәсәй Президентын һайлауҙа халыҡтың ваҡытлыса килеү урындарында 37 участка ойоштороала. Өфөлә, Стәрлетамаҡта һәм Дүртөйлө районында дауаханаларҙа, шифаханаларҙа, бала табыу йорттарында, тәфтиш изоляторҙарында ваҡытлыса участкалар асыла. 18 мартта Рәсәй Президентын һайлау көнөндә юлда булған рәсәйҙәр тимер юл вокзалдарында, шулай уҡ 25 аэропортта ойошторолған һайлау участкаларында тауыш бирә ала.

✓ Өфөлә 1-се мәктәпте реконструкциялау дауам итә (М. Кәрим урамы, 53/55). Яңы корпус 1951 йылда төҙөлгән һәм 2009 йылда аварияла тип танылған ике ҡатлы тәүге мәктәп урынында һалына. Әлеге ваҡытта 1-се мәктәп уҡыусылары 2-се башҡорт лицейында белем ала. Төҙөлөш эштәре 2017 йылдың июнендә башланды һәм 2018 йылдың аҙағына тамамланырға тейеш. 1-се мәктәп 775 балаға белем биреүгә иҫәпләнгән, был элеккегә ҡарағанда ике тапҡырға күберәк.

**"Башинформ"дан.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ЙӘШТӘРГӘ - ТАШЛАМА

**Ил Хөкүмәте балалары булған ғаиләләрҙең ипотека проценты ставкаһын субсидиялау тәртибен билдәләне.**

Документҡа ярашлы, 2018 йылдың 1 ғинуарынан 2022 йылдың 31 декабрь арауығында икенсе йәки өсөнсө бала тыуған осраҡта ғаиләгә ипотека буйынса ташлама һәм кредитты 6 процент ставка менән түләү хоҡуғы биреләсәк. Икенсе бала тыуған осраҡта был осор - өс, ә өсөнсө бала тыуғандан һуң биш йыл тәшкил итәсәк. Ҡағиҙәгә ярашлы, торлаҡ яңы булырға тейеш. Шулай уҡ элек алынған торлаҡ кредитын рефинансларға ла мөмкин буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта дәүләт ярҙамын алыу өсөн ипотека килешеүе 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң төҙөлгән булырға һәм кредит суммаһы төбәктәр өсөн - өс миллиондан, ә Мәскәү, Мәскәү өлкәһе, Санкт-Петербург һәм Ленинград өлкәһендә һигеҙ миллион һумдан артмаҫҡа тейеш. Торлаҡ алғанда түләнгән тәүге иғанә 20 проценттан да кәм булмауы, займ алыусының ғүмере төрлө бәхетһеҙ осраҡтарҙан һәм торлағы страховкаланған булыуы мөһим.

Башҡортостанда шундай ташламалы ипотека юллау мөмкинлеге биргән "Жилстройсбережение" программаһы ла эшләй. Быйыл унда ҡатнашыу өсөн шарттар еңеләйтелде. Тулыраҡ мәғлүмәтте БР Торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереү фондының рәсми сайтында алырға була.

## ГАЗҒА КӨЙЛӘ...

**Ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан республикала газомотор яғыулығында эшләүсе автомобилдәр өсөн һалым ташламаһы күләме артты. Хәҙер ул элекке 20 процент урынына 50 процент тәшкил итә.**

Ташлама менән кәмендә 10 йыл элек ойошторолған автопарк ҡуллана ала. Милкендә газ менән заправкаланған бер нисә автомобиле булған физик шәхестәр тик бер генә машинаһы өсөн ташлама алырға мөмкин. Башҡортостанда әлеге ваҡытта газ менән заправкалаусы 15 станция бар. Уларҙың 4-һе Өфөлә урынлашҡан. "Рәсәй транспорты" форумындағы сығышында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов уларҙың һанын кәмендә 10 процентҡа арттырырға кәрәк, тип билдәләне.

## ИҢ АҘ ХЕҘМӘТ ХАҠЫ...

**Рәсәй президенты Владимир Путин белдереүенсә, хеҙмәт хаҡының минималь күләме (МРОТ) йәшәү минимумы күләменә тиклем арттырыласаҡ. Ул, планлаштырылған буйынса, 2019 йылдың 1 ғинуарынан түгел, ә 2018 йылдың 1 майынан күтәреләсәк.**

Шулай итеп, ағымдағы йылдың 1 майынан хеҙмәт хаҡының минималь күләме 11163 һумға тиң буласаҡ. Әлеге ваҡытта ул 9489 һум тәшкил итә. Ә йыл дауамында МРОТ-тың күтәрелеүе, дөйөм алғанда, 43 процентҡа етәсәк, тип күҙаллана. Хеҙмәт хаҡының минималь күләменең күтәрелеүе 1,5 миллион кешегә ҡағыласаҡ. Уларҙың артыһы бюджет өлкәһе эшселәре. Башҡортостанда, 15 процент күләмендәге Урал коэффициентын иҫәпкә алғанда, эш хаҡының минималь күрһәткесе бөгөнгә көндә 10912 һум.

КӨНҮҘӘК ТЕМАҒА

# ӨЙӨГӨҘҘӘ БАРЫҺЫ ЛА ЯҠШЫМЫ?



**Былтыр баш ҡалала төп тема булып ҡар таҙартыу мәсьәләһе торһа, быйыл Ағиҙел йылғаһы аша һалынған күперҙең авария торошонда булыуы көн үҙәгенә сыҡты. Ғәҙәттәгесә, ошондай ваҡытта граждандарҙың "интеллектуаль кимәле, аналитик һәм логик фекерләүе" үҫеп китә һәм һәр кем тосораҡ тәнҡит һүҙе әйтеп ҡалырға тырыша йәки, Мәжит Ғафуриса әйткәндә, һарыҡты кем ашаған, тигән һорауға яуап версияларын тәҡдим итә башлай. Ә хәҡиҡәт ҡайҙалыр эргәлә генә һәм уны беҙ ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә эҙләнек.**

Өфө ҡалаһының коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Владимир Чернов белдереүенсә, былтыр "Мосты" Ғилми-тикшеренеү институты үткәргән экспертиза 61 йыл файҙаланылғандан һуң Ағиҙел йылғаһы күперенең конструкцияларында ҡоролманы ҡулланыу ваҡытын ҡыҫҡартыусы емереклектәр булыуын асыҡлай һәм реконструкция үткәргәнгә тиклем күперҙән йөк машиналары йөрөүен тыйырға; 1, 8, 11-се терәүҙәр өҫтөндәге зыянланған ялғауҙарҙы алмаштырырға; уң яҡ тротуарҙағы зыянланған ялғауҙар өҫтөндәге металл япманы (металлические листы) алыштырырға; һауа температураһы минус 25 градустан түбән төшкәндә күперҙе тулыһынса ябырға; гидроизоляцияны ла индереп, күпер полотноһын алыштырырға; реконструкция эшләгәнгә тиклем транспорт үткән юлдың торошона даими мониторинг үткәрергә күрһәтмә бирә.

Күрһәтмәләргә ярашлы саралар күрелә, даими тикшереү һөҙөмтәһендә 8-се терәү өҫтөндәге ялғауҙың тағы ла 9 сантиметрға айырылып, ярыҡтың 14,5 сантиметрға етеүе асыҡлана. Был плитаны зыянлай һ.б. Әлеге ваҡытта тығындар барлыҡҡа килмәһен өсөн яңы күперҙә ике яҡлы хәрәкәт ойошторолған.

Ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов белдереүенсә, 2004 йылда Ағиҙел күперенең торошо асыҡланғас, ҡала көнбайыштан Затон күперен һәм Ташкисеүҙә Пугачев урамы күперен эшләй башлай, йәғни бөгөнгә хәлгә алдан әҙерләнә. Шуға әлеге ваҡытта баш ҡалаға, 5-10 км урауыраҡ булһа ла, ошо ике йүнәлеш буйынса инергә мөмкин. Ҡыҫҡаһы, пик сәғәттәрендә лә транспорт ағымы ҡалаға инә һәм сыға ала. Әммә был мәсьәләне тулыһынса хәл итеү тигәнде аңлатмай. Өфөнөң транспорт проблемаһын хәл итеү өсөн бөгөн ике йылға аша 10 күпер кәрәк. Был үҙе ҙур ресурстар талап итә.

Ә Ағиҙел күпере тағы ла ике йыл хеҙмәт итһен өсөн уға йылы миҙгелдә ремонт үткәрергә кәрәк. Әле ошо сараға әҙерлек бара. Бер үк ваҡытта республика етәкселеге һәм Хөкүмәте менән яңы күпер төҙөү һәм иҫкеһен ремонтлау өсөн аҡса эҙләнә.

Ҡыҫҡаһы, донъя булғас, нимәлер ҡыйралып та, емерелеп тә, ватылып та китеүсән. Үҙ хужалығыбыҙҙа бындай күренештәргә аңлап ҡарайбыҙ һәм шулай тейеш, тип ҡабул итәбеҙ. Ә ауыл, район, ҡала, республика, ил кимәлендә нимәлер булһа, ул шунда уҡ ҡара төҫтәрҙә ҡабул ителә һәм төрлө имеш-мимештәр менән ҡуйыртыла башлай. Әйтерһең дә, бөтөн нәмәгә етәкселек гәйепле һәм бер нәмә лә сафтан сығырға тейеш түгел. Һәр мәсьәләлә хәҡиҡәтте саҡ ҡына аңлар өсөн булһа ла, ошо ауыл-ҡала-район-республика-ил моделен үҙебеҙҙең-тугандарыбыҙҙың-ырыуыбыҙ-ҡәбиләбеҙҙең өйҙәренә күсереп ҡарайыҡ. Унда барыһы ла идеаль тороштамы? Ишараны аңлағанһығыҙҙыр, моғайын...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҺӨЙӨНСӨ!

## ҠОРОЛТАЙ ЙОРТЛО БУЛДЫ!

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты яңы урынға күсте. Хәҙер йәмәғәт ойошмаһының офисы Революцион урамы, 43 адресы буйынса, Александров йорто булараҡ билдәле бинала урынлашҡан. Үткән аҙнала офис рәсми асылды.**

"Бында республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың үҫеше хаҡына яңы фекерҙәр, яңы идеялар тыуасаҡ", - тине Ҡоролтай рәйесе Әмир Миңнеәхмәт улы тантананы асып. Уның белдереүенсә, Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың һәм республика Хөкүмәтенең ярҙамы арҡаһында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты үҙ тарихында беренсе тапҡыр айырым бинаһы булды. Ике ҡатлы йортта Ҡоролтай аппаратының бүлмәләре, йыйылыштар залы, архив урынлашҡан.

"Бөгөн барлыҡ башҡорт халҡы өсөн әһәмиәтле көн - Ҡоролтай бинаһы булды. Ул барлыҡ ватандаштарыбыҙ, шул иҫәптән республиканан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙ өсөн яңы каруанһарай булыр тип уйлайым. Уның ишектәре һәр башҡорт өсөн һәр саҡ асыҡ булһын", - тине тантаналы сарала БР Башлығы хакимиәтенең ижтимағи-сәйәси үҫеш идаралығы начальнигы урынбаҫары Ришат Сабитов.

XX быуат башында төҙөлгән йорт Башҡортостан Республикаһының мәҙәни мираҫ объекты, архитектура һәйкәле булып тора һәм дәүләт тарафынан һаҡлана. Уның хужаһы ябай крәҫтиән сығышлы Александр Александров була. Ғаиләһе өсөн ул ике ҡатлы таш йорт һала, төҙөлөш 1911 йылда тамамлана. Һуңғы йылдарҙа бында банк учреждениеһы урынлашҡан булған.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2018 йылда Башҡортостан власы "Заманса ҡала мөхитен булдырыу" өҫтөнлөклө проектын финанслауға 1 миллиард һумдан ашыу: федераль бюджеттан 891 миллион, республиканан 175 миллион һум йүнәлтергә күҙаллай. Ағымдағы йылда проектта республиканың бөтә 63 муниципалитеты ла ҡатнаша. Субсидиялар Рәсәй Төҙөлөш министрлығының методик кәңәштәренә ярашлы бүленә, тип аңлаттылар төбәк Хөкүмәтендә. Рәсәй Хөкүмәтенең ҡарарына ярашлы, 2018 йылда республика ҡалаларында йәшәүселәр үҙ тораҡ пунктында төҙөкләндереү объектын һайлай ала, ул рейтинг тауыш биреү юлы менән уҙғарыла.

✓Башҡортостанда йөнлектәрҙе һәм ҡоштарҙы ҡышҡы һанау миҙгеле башланды. Төбәктең Экология министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, дөйөм һунарсылыҡ, махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләрендә эҙҙәр буйлап иҫәпләү күҙаллана. "Иҫәп алыу" февраль аҙағына тиклем тамамланырға тейеш. Һунарсылыҡ биләмәләренә һәм ундағы йәшәү мөхитенә дәүләт мониторингы һөҙөмтәләре апрель башында билдәле була. Алынған мәғлүмәттәр буйынса һунар итеү өсөн хайуандар һәм квоталар һанын билдәләү ҡаралған. Әлеге ваҡытта республикала болан, ҡоралай, һеләүһен, ҡуян, төлкө, айыу кеүек йөнлектәрҙең артыуы күҙәтелә.

✓Өфө миллионлы ҡалалар араһында төп капиталға эре һәм урта предприятиеларҙы инвестициялау буйынса лидерҙар рәтендә. Сәнәғәттең нефть, әҙер металл изделиелар, электр ҡоралмалары, машиналар етештереү тармаҡтары иң ҙур үҫешкә эйә. Әлеге ваҡытта ҡала округы территорияһында инвестицияларҙың дөйөм күләме 189 миллиард һум тәшкил иткән 122 проект тормошҡа ашырыла. Улар сафҡа инһә, яҡынса 9,5 мең эш урыны буласаҡ. Инвестиция күләменең 90 проценты - инвесторҙарҙың шәхси средстволары.

✓"ЮВТ Аэро" авиакомпанияһы Өфө-Геленджик рейсы асылыуы тураһында белдерҙе. Алдан "ЮВТ Аэро" авиакомпанияһы Өфөнән Батуми ҡалаһына рейс асылыуын хәбәр иткәйне. Уҙған көндәрҙә"КрасАвиа" компанияһында Сочиға билеттар һатыла башлауын һөйләнеләр, ә Чечня Республикаһы Башлығы Рамзан Ҡадиров Өфө менән Грозный араһында рейс асылыуын белдерҙе.

**Телефон кәрәк-яраҡтары һәм башҡа ошондай электрон әйберҙәр менән һатыу иткән магазин хужаһын беләм. Бөгөн хатта бәләкәй генә киоскыларҙа ла мини-терминал аша банк картаһы менән иҫәпләшергә мөмкин булғанда, уның магазинында тик ҡулаҡса ғына баһалана. Ул үҙе лә бер ҡасан да банк карталары менән ҡулланмай, банктарҙа аҡсаһын һаҡламай, төрлө түләүҙәрҙе лә тик касса аша башҡара. "Банк хужаларын байытыу йәки мутлашыусыларға "бүләк" итер өсөн эшләмәйем. Банктағы аҡса ул әле бар, әле юҡ, ә тере аҡса ышаныслыраҡ", - тине ул ни өсөн карталар менән ҡулланмауын һорағас. Ә бөгөнгө көндә популярлаша барған криптовалюта тураһында әйткәс, бөтөнләй ҡулын ғына һелтәп ҡуйҙы. Нимә һуң ул криптовалюта, биткоин? Ағымдағы мутлашыу әмәлеме, әллә киләсәк валютаһымы?**

# КРИПТОВАЛЮТА...

## Алдаҡмы, әллә киләсәк аҡсаһымы?



Рәсәйҙә беҙ тауар алыш-бирешен, күпселек осраҡта, һум ярҙамында башҡарабыҙ. Америка доллар ҡуллана. Европа илдәрендә евро, ә Ҡытайҙа - юань әйләнештә йөрөй. Бөгөн килеп интернеттың үҙ аҡса берәмеге - криптовалюта барлыҡҡа килде. Уларҙың бер нисә төрө бар: биткоин, лайткоин һәм башҡа берәмектәр. Криптовалютаның нисек эшләүен биткоин миҫалында ҡарап үтәйек. Уның әйләнешкә сығыуы (эмиссия) һәм иҫәпкә алыныуы төрлө криптографик алымдарға, йәғни йәшерен тамғалар менән яҙыу ысулына таянып башҡарыла. Был системала ҡулланылған аҡса криптографик (математик) хэш-код - ул btc-тар. Уларҙың һәр береһе уникаль һәм берберенән ҡабатламай. Нимәлер һатып алғанда биткоин менән түләү һатып алыусының һатыусыға ошо финанс берәмектең хэш-кодын тапшырыуына ҡайтып ҡала. Унда ике төрлө - "ябыҡ" (уның ярҙамында финанс инструменттары һатыу йәки һатып алыуҙа төҙөлгән килешеүгә, йәғни транзакцияға "ҡул ҡуйыла") һәм "асыҡ" (әлеге килешеүгә тиклем булған транзакцияларҙың ысын булыуын тикшерә) аҫкыстар була. ВТС-ты, йәғни цифрлы валютаны, төрлө юлдар менән эшләп була. Биткоиндарҙы һатып алырға. Бөгөнгө көндә был иң популяр ысул. Үҙеңдә булған тауарҙы биткоинға һатырға. Ниндәйҙер эш башҡарырға һәм уның өсөн түләүҙе биткоин менән алырға. Шулай уҡ интернет селтәрендә ҡайһы бер сайттар бәләкәй генә хеҙмәт өсөн биткоиндарҙы бушлай тарата. Шулай уҡ майнинг (инглиз теленән mining - файҙалы ҡаҙылмаларҙы табыу) - көслө компьютерҙа махсус программалар ярҙамында ҡатмарлы иҫәпләүҙәр үткәреп һәм билдәле мәсьәләләрҙе сисеп аҡса табыу. Нәҡ уларҙан ҡалғандар биткоиндар һатып ала. Биткоиндарҙы тик интернет киңлегендә булдырылған аноним btc янсыҡтарҙа ғына һаҡлап була. Әйткәндәй, биткоиндың иң бәләкәй берәмеге сатоши 0,000000001 ВТС-ҡа тиң.

Аңлауыбыҙса, криптовалютаны ниндәйҙер аныҡ ойошма йәки банк түгел, ә ҡатмарлы математик алгоритмдарға таянып, ошо системаның ҡатнашыусылары үҙҙәре сығара. Мәҫәлән, беҙҙең янсыҡтағы реаль баһаға эйә һумдарҙы Рәсәйҙең Үҙәк банкы етештерә һәм улар алтын һәм валюта запастары менән нығытылған. Был аҡса берәмеге илдең иҡтисади хәле ниндәй булыуына ҡарап үҙгәрә. Ә криптовалюта ни рәүешле нығытылған? Бер нисек тә! Әгәр ҙә банкта йыйып барған аҡсабыҙ юғала ҡалһа, беҙ банкка, дәүләткә үҙ дәғүәбеҙҙе белдереп, аҡсабыҙҙың кире ҡайтыуына өмөтләнергә мөмкинбеҙ. Ә виртуаль янсыҡта тупланған биткоиндар юҡҡа сыҡҡан осраҡта бер кемгә лә мөрәжәғәт итеп булмаясаҡ. Биткоиндарҙы һатып алырға теләүселәр булғанда ғына ул баһалы. Әгәр ҙә виртуаль аҡсалар менән эш итергә теләүселәр бөтһә, реаль аҡса түгеп һатып алған биткоиндарҙың бер кәрәге лә булмаясаҡ. Әлбиттә, интернет селтәрендә виртуаль аҡсаны реаль валютаға әйләндереп, ҡулға алыу мөмкинлеге биргән махсус банкоматтар тураһында мәғлүмәт күп, хатта видеояҙмалар ҙа бар. Ләкин Рәсәйҙә, Банктар тураһындағы федераль закондың 27-се статьяһына ярашлы, тик һум ғына рәсми аҡса берәмеге һанала һәм ил биләмәһендә икенсе төр валюта сығарыу һәм уны әйләнешкә индереү тыйылған. Шуға күрә, Рәсәй Банкы виртуаль валюта менән ҡулланыуҙа һаҡ булырға саҡыра. Улай ғына ла түгел, Рәсәй Финанс министрлығы иҫәп-хисап өсөн махсус криптовалюта булдырыуҙы енәйәт эше булараҡ квалификациялауҙы ҡараған закон проекты өҫтөндә эш алып бара. Әгәр ҙә закон ҡабул ителһә, криптовалюта кешенең шәхси милке булып иҫәпләнәсәк, ләкин ул аҡса берәмеге, түләү сараһы булараҡ ҡулланылмаясаҡ. Нисек кенә булмаһын, Рәсәй Президентының әмере буйынса, Рәсәй Банкы һәм Хөкүмәт ағымдағы йылдың 1 июленә ҡәҙәр криптовалюта, майнинг өлкәһен көйләргә һәм ҡануниәткә тейешле үҙгәрештәр индерергә тейеш.

Криптовалюта менән эш итергә теләүселәрҙең һаны арта. Ошо өлкәлә үҙ эшмәкәрлектәрен алып барыусылар рекламаға, потенциаль инвесторҙарға аңлатыу эше алып барыуға ваҡыттарын йәлләмәй. Әлеге интернет-эшҡыуарҙар һәр ҡайһыһы интернетта махсус блог алып бара һәм ауыҙ һыуҙары ҡороп, криптовалютаға капитал һалыу ни тиклем төшөмлө икәнлеген яҙа. Шул уҡ ваҡытта улар тере аҡса килтереүсе төп эштәрен ташламай йәки башҡа төрлө килемле шөғөл менән булыша. Эйе, бәлки, уларҙың виртуаль янсыҡтарында миллионлаған һум аҡсалары яталыр. Ләкин ул аҡсалар - виртуаль, йәғни бар ҙа кеүек, юҡ та һымаҡ. Виртуаль үҙе үк "булыуы мөмкин, шартлы, хыялдағы" тип тәржемә ителә бит.

Иҡтисад өлкәһендә "эт ашаған" сәйәсмәндәр, Рәсәй Үҙәк банкы башлығы Эльвира Нәбиуллина һәм "РОСНАНО" етәксеһе Анатолий Чубайс, криптовалютаны пирамидаға тиңләне һәм дәүләт тарафынан тиҙ арала тейешле саралар күрелмәһә, алданыусыларҙың күп буласағы тураһында иҫкәртте. Ә JPMorgan Chase банкы башлығы Джеймс Даймон биткоинды мутлыҡ тип атаны һәм криптовалюта менән операциялар эшләүсе хеҙмәткәрҙәрен эштән сығарасағы тураһында белдерҙе. Банкир хәтлем банкир ҙа был системаны инҡар иткәс, ябай кешегә был өлкәгә инеүҙән фәтеүә булырмы, тигән һорау тыуа. Әлеге көндә үк криптовалютаға һалыу өсөн алынған кредиттарын түләй алмау сәбәпле йорттарынан ҡолаҡ ҡаҡҡан, миллионлаған доллар "тере" аҡсаларын һалып, банкротҡа ултырған инвесторҙар бар. Һәм улар, моғайын, арта ғына барыр. Әлбиттә, әлегән-әле яңы технологияlar тыуып торасаҡ, уларҙы тыйып йәки күҙ йомоп ҡына ҡалып булмай. Шулай ҙа замандан артта ҡалмайым йәки аҡса эшләйем тип, төпһеҙ упҡынға сумыуҙан һаҡ булыу күңелһеҙ хәлдәргә тарымаҫҡа мөмкинлек бирер. Айыҡ аҡыл менән эш итеү бер кемгә лә зыян килтергәне юҡ әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кеҫәңдәге аҡсаңды сығарып (ул йә биткоин, йә майнингта ҡулланылған видеокарта һатып алыуға, йә булмаһа күпмелер аҡса түләп, ошо йүнәлештә эшләгән компания сафына баҫырға) криптовалюта системаһына индең дә, үҙеңдең аҫтыңа команда йыяһың. Бөгөнгө көндә, мәҫәлән, 100 һумға 0,0001 ВТС һатып алырға мөмкин, йәғни виртуаль янсығыңда 73,58 һумға торошло виртуаль аҡса ятасаҡ, тип аңларға кәрәк. Артабан ул күбәйһен өсөн инвесторҙар эҙләйһең. Улар, үҙ сиратында, тағы ла аҡсаһын сығарып һалыусылар эҙләй. Һәм ошо рәүешле дауам итә. Әгәр ҙә аҡса индереүселәр бөтһә, системаның да хәле ҡыл өҫтөндә ҡаласаҡ, тип күҙалларға мөмкин. Ә, бәлки, тап киреһенсә булыр. Бәлки, беҙ, криптовалютаның киләсәгенә ышанмаусылар, күпмелер ваҡыттан һуң терһәкте тешләп үкенербеҙ, ә бөгөнгө интернет-эшҡыуарҙар сереп байып, беҙҙән көлөр. Ваҡыт күрһәтер.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Кесерткән төнәтмәһе

❖ Сәс ҡойолоуын, ағарыуын, ҡауаҡланыуын кәметеү өсөн 50 грамм яңы йыйылған кесерткән тамыры һәм япраҡтарын ярты литр һыуҙа, 5-6 тамсы аш һеркәһе өҫтәп, ярты сәғәт ҡайнатырға. Һыуытылған, һөҙөлгән төнәтмәне һыуға ҡушып йыуынырға ла, баш тиреһенә һөртөргә лә ярай. Төнәтмә яһау өсөн тамыр, япраҡтарға 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәп, 1 сәғәт урап тоторға.

## Һыҙланғанда

❖ 1 литрлы шешәнең яртыһына тиклем ҡырмыҫҡа иләүе һалып, шешә тулғансы таҙа араҡы йәки спирт ҡойорға ла, йылы урында бер нисә көн тоторға. Шул шыйыҡсаны һыҙлаған урынға һөртөргә. Һалҡын тейгәндә иртәле-кисле ярты балғалаҡтан башлап, 1 балғалаҡҡа еткереп эсергә.

❖ Был шыйыҡсаны тирегә һөрткәндә тирләйһең, ә төнәтмәне ҡабул иткәндә тире ҡыҙарып торорға тейеш. Тире ҡубып төшөүе лә ихтимал, был дауаның файҙаһын күрһәтә.

## Мускулдарҙы нығытыу

❖ Бының өсөн велосипедта күберәк йөрөргә кәрәк. Аяҡтар менән ишеп йөрөү йөрәк, үпкәне нығыта, ҡан әйләнеше яҡшыра. Әммә велосипед ҙур булмаһын, йөрөүе ауыр була. Башлыса йәштәр өсөн был кәңәш.

## Тамаҡ саҡырһа

❖ Тамаҡ саҡырыу йәки сиҡаҡлау даими яфалаһа бал ҡорто елемен файҙаланырға була. 1 л һөткә 50-100 г ваҡланған елемде һалып, болғай-болғай һүрәнерәк утта 10 минут ҡайнатырға һәм марля аша һөҙөргә, быяла һауытта һаҡларға, һалҡынса ҡараңғы урында тоторға кәрәк.

## Энурез

❖ Бала кесе яраuын тота алмай, аҫтын "еүешләһә", көн тәртибен, гигиенаны һаҡлау, ҡаты урында йоҡлау кәрәк.

❖ Төнөн бер-ике тапҡыр уятып, туалетҡа барыуға күнектерегеҙ.

❖ Көндөң икенсе яртыһында шыйыҡ ризыҡты кәметергә, сәғәт етенән һуң ҡоро ризыҡ ҡына ашатырға.

❖ Шулай уҡ шыршы ылыҫтары һалынған һыуҙа ятыу бик файҙалы.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Бала бер ҡасан да сәбәпһеҙ иламай. Шуға күрә, илағанын ишеткәс тә, иғтибар итергә кәрәк. Үҙенә ярҙамға әҙер булған кеше барлығын тойоп үҫергә тейеш ул. Әгәр ҙә ошо тойғоно кисермәһә, үҙен башҡаларҙан көсһеҙ, кәм һиҙәсәк.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

### Ҡөрәйштәрҙең оло яуы

Ҡөрәйштәр үҙаллы көрәштә мосолмандарҙы еңеү өмөтөн юғалта. Шуға ла улар башҡа ырыуҙарҙы ярҙамға саҡыра. Ҡайһы берәүҙәрен улар Ислам тәғлиматенең ҡурҡыныс булыуына ышандыра, ҡайһыларына аҡса түләй, ә ҡайһы берҙәренә хәрби табыш вәғәҙә итә. Йәһүҙи динен тотоусы ырыуҙар ҡөрәйштәргә ихлас ҡушыла. Улар, һуғыш башланыу менән, Мәҙинәләге йәһүҙи динен тотоусы Ҡурайза (Бану Ҡурайза) ырыуын мосолмандарға ҡаршы күтәрергә вәғәҙә итә.

Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡусмә тормош алып барыусы ырыуҙарға ҡаршы бер нисә рейд яһай. Быны менән ул байтаҡ ырыуҙарҙы ҡөрәйштәр менән булған килешеүҙәренән баш тартырға мәжбүр итә. Шундай рейдтарҙың береһендә, көтөлмәгәндә һөжүм итеп, мосолмандар бик күп кешене әсирғә ала, ә ағалы-ҡустылы ике ансарға урындағы шәйехтең ҡыҙы эләгә. Барра исемле теге ҡыҙ үҙенең азатлығының хаҡын билдәләй, бик күп аҡса тәҡдим итә. Ләкин ағалы-ҡустылы ансарҙар ҡыҙ тәҡдим иткән хаҡҡа ла риза булмай, үҙ хаҡтарын да билдәләмәй, ҡыҙҙың матурлығына хайран ҡалып, үҙ яндарында ҡалдырмаҡсы булалар. Барра аптырап тормай, Мөхәммәт бәйғәмбәргә барып, үҙен әсирғә алған ирҙәрҙе дөйөм ҡабул ителгән йоланы боҙоуҙарында ғәйепләй. Ҡыҙҙың матурлығына Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең дә иҫ-аҡылы китә. Барраның дәғүәһе менән ризалаша һәм уның азатлығының хаҡын билдәләй. Һәм шунда уҡ Барраға үҙенә кейәүгә сығырға тәҡдим яһай. Тик быны өсөн Барра мосолман динен ҡабул итергә тейеш була. Барра ризалашҡандан һуң, Мөхәммәт бәйғәмбәр ағалы-ҡустылы ансарҙарҙы саҡырып алып, уларға ҡыҙ өсөн билдәләнгән юғары хаҡты түләй. Бер нисә көндән һуң Барра Йәүһәриә исеме менән мосолман диненә күсеп, Мөхәммәт бәйғәмбәргә кейәүгә сыға.

Был хәл тураһында ишеткәндән һуң мосолмандар, Мөхәммәт бәйғәмбәргә хөрмәт йөҙөнән, Йәүһәриәнең әсиргә алынған йөҙләгән ырыуҙашын бушлай ирекҡә ебәрә. Сөнки, ни тиһәң дә, никахтан һуң был әсирҙәр Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең туғандарына әйләнә...

Ә ҡөрәйштәр 627 йылдың яҙында хәрби әҙерлекте тамамлай һәм ун мең яугир - дүрт мең ҡөрәйш һәм алты мең союздашы - Мәҙинәгә юллана. Был ҙур ғәскәр менән Әбү Суфиян һәм Өхөд һуғышында дан яулаған Хәлит ибн Вәлит етәкселек итә.

Быларҙың барыһы тураһында ла Мөхәммәт бәйғәмбәргә хәбәр итеп торалар. Мосолмандар асыҡ урында һуғыша алмай, сөнки уларҙың һибайлылары дошмандарыныҡынан күпкә аҙ була. Шуға ла ҡалала һәм ҡала янында һуғышырға тигән ҡарар ҡабул ителә. Мәҙинә халҡы ваҡытынан алда иген игә башлай һәм март урталарына бөтән оазиста ла иген йыйылып бөтә.

Хәрби кәңәшмәлә Сәлмән әл-Фәриси, ҡасандыр мосолмандар тарафынан азатлыҡҡа ебәрелгән фарсы ҡоло, бығаса гәрәптәргә билдәле булмаған фарсы хәйләһен ҡулланырға тәҡдим итә. Хәйләнең асылы шунда була: Мәҙинә ҡалаһын уратып, тәрән һәм оҙон соҡор ҡаҙырға ла, соҡорҙан сығарылған балсыҡ менән үҙҙәренең ағынан нығытма төҙөп, һибайлыларҙы үткәрмәҫкә. Дөрөҫөрәге, ҡаланы тулыһынса уратып ҡаҙырға ла түгел - төньяҡтан ғына. Сөнки ҡалған яҡтарҙан ҡалаға атлы ғәскәр яҡыная алмай - Мәҙинә өс яҡтан ҡалҡыулыҡтар менән уратылған була.

Мәҙинәне төньяҡтан уратып, соҡор ҡаҙыла башлай. Был эштә барыһы ла ҡатнаша - байҙар ҙа, ярлылар ҙа, мосолмандар ҙа, монафиҡтар ҙа, мәжүсиҙәр ҙә. Тик ҡурайза ырыуы ғына ярҙамға килмәй. Был һуғышта үҙенең нейтраль булып ҡалыуы тураһында рәсми рәүештә хәбәр итә ул.

**(Дауамы бар).**

*ӘСӘЙҘӘР ҠОЛАҒЫНА*

# САБЫЙЫҢ...

## йөрәк тибешенде ишетһен



**Алдымдан ғына йәш әсәй атлай. Бер ҡулында телефон - унан кемгәлер сабыйының бик тынғыһыҙ булыуын, көнө-төнө илауын, әле бына аптырағас, балалар поликлиникаһына барып врачтарға күрһәтеп ҡайтып килеүен һөйләй.**

Икенсе ҡулында - сумка-коляска. Унда бала илай, бер туҡтауһыҙ илағандан, әсенеп, тирләп-бышлығып бөткән. Сараһыҙҙанмы, әсә уны шул тиклем һелкетә, әйтерһең дә, унда бала түгел, ә ҡул йөгө. Үҙе һаман телефондан һөйләшеүен дауам итә:

- Педиатр борсолорға урын юҡ тине лә ул, көндө лә, төндө лә айырмай илағас, нисек көймәйһең, нисек көйәләнмәйһең. Шул тиклем арыным...

Бала, күп булһа, 2-3 айлыҡтыр. Йәш әсә лә, бала ла йәл булып китте.

- Сабыйыңды ҡулыңа ал, ярһыған бит, - тинем дә, үҙем дә һиҙмәҫтән, уның кире ҡаҡҡанын да көтмәй, сумка-коляскаға үрелдем. Әле генә бөтә тирә-яҡҡа яр һалған бала тымды ла ҡуйҙы. Әсәй тигәнем үҙе лә бала ғына шул, кескенәһе шулай тиҙ генә тымғанға ихлас аптыраны. Уңайһыҙланыпмы, бәлки сит кешенән ҡыҙғанғандыр ҙа, бәпесен ала һалды, юл ыңғайы булғас, коляскаһын тотошоп барҙым. Ҡыҙсыҡ иһә, әсәһе ҡулына алғас та, тынысланып, йоҡлап китте.

- Тынғыһыҙ булғас, автобуста ла йөрөргә уңайһыҙланам. Илай башлаһа, тынысландырып булмай бит, - тип һөйләнә-һөйләнә атлай әсә.

Балаһының атаһы Мәскәүҙә эшләй икән. Үҙе йәш бала менән ҡәйнә-ҡайныһы эргәһендә йәшәй.

- Баланы ҡулыңа өйрәтмә, илаһа ла алма. Илар-илар ҙа тымыр. Ҡулға бер өйрәнһә, бәйләнгән һымаҡ булырһың. Бер нәмә эшләй алмай, баланды ҡосаҡлап ултырырһың шунда, - тип ныҡ ҡына әйткән ҡәйнәһе. Килен ҡәйнәһенә ярайым тип, имеҙә лә һала икән. Илап арығас, бала үҙенән-үҙе йоҡлап китә.

- Сабыйыңды йышыраҡ ҡулыңа ал, һеңлем. Ул һинең йөрәк тибешенде ишетергә тейеш. Тыуғыҙ ай буйы һинең "йылы ҡосағыңда" йөрәк тауышыңды тыңлап үҫкән бит ул. Тыуғас, ҙур, билдәһеҙ, һыуыҡ мөхит уратып алғанын тойоп илай ул. Берҙән-бер таныш тауыш, йөрәк тибеше, йылылыҡ, еҫ - ул һинеке. Ул шуны тойғанда ғына үҙен бәхетле, хәүефһеҙ, кәрәкле итеп һиҙә, тынысланa. Бала бер ҡасан да сәбәпһеҙ иламай. Шуға күрә, илағанын ишеткәс тә, иғтибар итергә кәрәк. Үҙенә ярҙамға әҙер булған кеше барлығын тойоп үҫергә тейеш ул. Әгәр ҙә ошо тойғоно кисермәһә, үҙен башҡаларҙан көсһеҙ, кәм һиҙәсәк. Был иһә, үҫкәс, уның холҡонда, ҡылыҡтарында ла сағыласаҡ. Ғөмүмән, ҡыҙың илаһа ла, иламаһа ла, йышыраҡ күтәр, ҡосаҡла, ярат, иркәлә. Уның үҫкән ваҡытын һиҙмәй ҙә ҡалырһың. Сабый ваҡыты - бер мәл генә, бик һағынырһың әле, - тинем хушлашҡанда.

Йәш әсә балаһынан күҙен алмай, һаҡ ҡына атлай. Ә бәләкәй ҡыҙсыҡ ғәзиз кешеһенең йөрәк тауышын тыңлап, уның йылы ҡуйынында иҙерәп йоҡлай. Уға башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй. Уға тыныс, рәхәт, ул - бәхетле.

Әсәй менән бала бер бөтөн...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

# БАШҠОРТ НИ ӨСӨН "ҠЫРТ КИҪӘ"?

**Башҡорт телендә "Ҡырт киҫеү" тигән һүҙбәйләнеш бар. Уны ҡапыл ғына ҡарар ҡабул иткәндә, берәй эште хәл иткәндә ҡапыл өҙә әйтеүҙе, өҙә һуғыуҙы, ҡапыл ғына ҡырҡа яуап биреүҙе аңлатҡан саҡта ҡулланалар.**

Баҡтиһәң, был һүҙбәйләнештең "ҡырт" өлөшө бик боронғо замандарға барып тоташып, Көньяҡ Уралда йәшәгән боронғо көнсығыш иран телдәрендә һөйләшкән һәм хатта уларҙан алдараҡ йәшәгән һинд-иран телле (арий) ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған бер мираҫ икән. Иң боронғо дәүерҙәргә инеп китһәк, был ҡырт тамырын арийҙарға барып тоташҡан санскритта табабыҙ. Уларҙа krti һүҙе бысаҡ тигәнде аңлатҡан. Санскриттан тыш, иран телдәренең береһендә һөйләшкән согдтарҙың телендә лә kart (krt-), һуңғараҡ пехлеви телендә лә шул уҡ kard - тамырын күрәбеҙ, иран телле осетиндарҙа kard, фарсыларҙа kard- һәм башҡа иран телле халыҡтарҙың телдәрендә лә ошо тамырлы һүҙ "бысаҡ", "ҡылыс" мәғәнәһендә ҡулланыла икән. Был "ҡырт" - "бысаҡ", "ҡылыс" мәғәнәһендә мадьяр һәм уларға туғандаш ханттарҙың телендә лә бар. Әгәр борон башҡорттарҙың мадьярҙарҙың формалашыуында ҡатнашҡанын, ханттар менән дә ҡатнашыуын иҫҡә төшөрһәк, уларға был һүҙ башҡорттарҙан килеп ингәнен күрергә була.

"Ҡырт киҫеү" һүҙбәйләнешенең барлыҡҡа килеүенә ҡыҫҡаҡ ҡына байҡауҙы тамамлап, боронғо ата-бабаларыбыҙ "ҡырт киҫеү" тигәндә "бысаҡ, ҡылыс менән өҙә сабыуҙы" күҙ уңында тотҡан булып сыға, тип әйтә алабыҙ.

Шулай итеп, бер генә һүҙ ҙә, төпсөнә башлаһаң, боронғо тамырҙарыбыҙҙы байҡарға мөмкинлек бирә. Телебеҙгә иғтибарлы, ихтирамлы булайыҡ. Ул бит беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған бер нәмәгә алмаштырғыһыҙ, беҙҙе донъяға башҡорт итеп танытҡан оло мираҫ.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

# ӘТТЕК



**Был матур ҡыңғырау сәскәһенең, нәфис ҡыр гөләнөң халыҡ телендәге исеме - әттек (әҙәби телдә - әтлек). Һуғыш осоронда, икмәккә ҡытлыҡ ваҡыттарҙа ауыл кешеһенә аслыҡтан ҡотолорға ярҙам иткән әттек, сөнки уның тамыры ашарға яраҡлы.**

"Әттек соҡоуыц - эттек" (эттек, тимәк, этлек), "Әттек ҡаҙыуыц - бәттек" (бәттек - элтек, ыҙа) тигән әйтемдәр ҙә бар беҙҙең яҡта. Тамырының оҙонлоғо 30-40 см тирәһелер, әсәйем, һәйбәте килеп әләкһә, тукмастаяҡ оҙонлоғо самаһы була, ти торғайны. Тамырын ҡаҙып ала торғас, икенсе йылына үҫмәй, эттек эҙләп, әллә ҡайҙарға барып сыға торғайныҡ, тип һөйләрҙәр ине. Оҙон тамырҙы кәсер бысаҡ йәки салыр менән соҡоп сығарғандар. Кәсер бысаҡ тигәне йоҡарып, ялына ғына ҡалған салғынан эшләнгән бысаҡ икән. Салғы ялы тигәне салғының ҡалынайып, бөгәлгән ере икән. Эттек һыныл сыҡһа, йәш үҫемлек була. Үндайҙарын шунда уҡ һөртөштөрөп, ашап, туйып алалар. Әттекте ҡыңғырау сәскәләре буйына йәшме, ҡатымы икәнен белеп була. Сәскәләре аҡһыл зәңгәр булһа, әттек тамыры оҙон, йыуан, тигән һүҙ. Алып ҡайтып йыуып, турап киптергәндәр. Шуны ҡул тирмәне менән тартҡандар. Он һымаҡ ап-аҡ булған. Шуны ыуып, ыумас бешергәндәр, икмәк-көлсә иткәндәр.

**Таңһылыу ВӘЛИЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

✔ *Ул ваҡытта башҡорттар Төмән өйәҙенең Бышкар, Терһәк, Пышма һәм Исәт улыстарында йәшәгән. Улар терһәк һәм һеңрән ҡәбиләләре башҡорттары була. Терһәк улысы исеме лә башҡорт ҡәбиләһе исеменән барлыҡҡа килә.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ҺЕҢРӘН ҺӘМ ТЕРҺӘК ҠӘБИЛӘЛӘРЕ

## Көнбайыш Себерҙә йәшәгән улар

**Башҡорттарҙың Себер ерендә күптән йәшәүе билдәле. Быны бигерәк тә күренекле рус картографы, этнографы, тарихсыһы һәм архитекторы Семен Ульянович Ремезовтың (1640 - 1720 йылдан һуң) хеҙмәттәре иҫбатлай.**



1696 йылдың 10 ғинуарында Рус хөкүмәте бойороғо буйынса Себер территорияһының чертеждарын эшләү Тубыл ҡалаһында йәшәүсе С.У. Ремезовҡа ҡушыла. Был эшкә Семен Ремезов әүҙем тотона һәм 1667 - 1668 йылдарҙа уҡ донъм Себер чертежын әҙерләй. Ә инде 1701 йылға Ремезов был ҙур ерҙең айырым өлөштәренә чертеждар эшләп өлгөртә. Автор, ул чертеждарҙы атласҡа берләштереп, "Чертежная книга Сибири" тип атай. Был атлас 23 чертеждан тора һәм алтыһында башҡорттар күрһәтелгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы: был чертеждарҙың береһе Себер ерен һүрәтләй, ул атластың 15-се чертежы һәм "Чертеж земли Красноярского города" тип атала.

"Чертеж земли Красноярского города" көнбайышҡа, көньяҡ-көнсығышҡа йүнәлтелгән, ул Красноярск ҡалаһына һәм уның эргә-тирәһенә арналған. Чертежда Йәнәсәй (Енисей) йылғаһы, уның ҡушылдыҡтары, уртала Красноярск ҡалаһы, унда йәшәгән халыҡтар күрһәтелгән. Йәнәсәй йылғаһы башында ике тирмә төшөрөлгән. Улар янында русса "башкыры", голланд теләндә "baskiyry" тигән яҙыуҙар бар.

Шуны ла әйтергә кәрәк: С.У. Ремезов был чертеждарҙы әҙерләгәндә Тубыл ҡалаһында архив тикшеренеүҙәре үткәрә, писцовый китаптарҙы, перепись яҙмаларын, межа акттарын, статистика мәғлүмәттәрен, хәрби рекогносцировка документтарын - "доездар"ҙы тикшерә. Шулай уҡ Ремезов тәрән белемле кешеләрҙең - "ведомцы"ларҙың, сәйәхәтселәрҙең - "бывальцы"ларҙың, урындағы халыҡтарҙың - "уроженцы", "старожилы"ларҙың әрҙамынан файҙалана. С.У. Ремезов үҙе лә сәйәхәттәр ҡыла. Шуға күрә "Чертеж земли Красноярского города"ла Йәнәсәй йылғаһы башында башҡорттар һүрәтләнеүе бер ҙә осраҡлы түгелдер һәм "башкыры", "baskiyry" яҙыуҙары шул ерҙә башҡорттарҙың күптәнән бирле йәшәүенә ишара яһай.

Башҡорттарҙың борондан Көнбайыш Себерҙә йәшәүе билдәле. Мәҫәлән, билдәле совет этнографы Б.О. Долгих үҙенең "Родовой и племенной состав народов Сибири в XVII в." китабында (1960 йыл): "Беҙҙең сығанаҡтар (Рәсәй дәүләт боронғо акттар архивы - **А.П.**) бөтә Төмән өйәҙенең төп халҡын татар тип атай. Ысынбарлыҡта Төмән өйәҙенең төп халҡы араһында себер татарҙары ғына түгел, ә хәҙерге ҡайһы бер башҡорт ырыуҙарының ата-бабалары ла була", - тип яҙа. Әйтергә кәрәк, ул ваҡытта башҡорттар Төмән өйәҙенең Бышкар, Терһәк, Пышма һәм Исәт улыстарында йәшәгән. Улар терһәк һәм һеңрән ҡәбиләләре башҡорттары була. Терһәк улысы исеме лә башҡорт ҡәбиләһе исеменән барлыҡҡа килә, шулай уҡ Бышкар улысы исеме рус тарихи сығанаҡтарында икенсе төрлө варианттарҙа осрай (Башкурская волость, Баскурская волость). Тимәк, ул улыстың исеме "башҡорт" этнонимы менән бәйле булырға тейеш. Шулай итеп, башҡорттар - Көнбайыш Себерҙә борондан йәшәгән халыҡ.

Ә инде Себерҙең башҡа сиктәренә башҡорттар башҡа төрлө ваҡиғалар арҡаһында ла барып сыға. Мәҫәлән, 1865 йылда Иркутск ҡалаһында "Записки Сибирского отдела Русского географического общества" серияһында урындағы ғалим В. Чудовскийҙың "Историко-этнографический очерк Иркутской губернии" исемле мәҡәләһе баҫылып сыға. В. Чудовский губернала йәшәгән халыҡтар тураһында яҙа, хатта өҫтәмә рәүештә Иркутск губернаһының этник картаһын да эшләй. Автор мәҡәләһенең "татары и различные кавказские народы" тигән өлөшөндә һөргөнгә ебәрелгән халыҡтар араһында башҡорттарҙы ла атап үтә, уларҙың ир-заттары ҡатынҡыҙҙарҙан 6 тапҡырға күберәк, тип күрһәтә. В. Чудовскийҙың хеҙмәтенән башҡорттарҙың Иркутск губернаһында байтаҡ булыуы күренә.

Билдәле булыуынса, 1789 йылда Өфөлә мосолмандарҙың диниә назараты булдырыла. Ләкин һуңыраҡ барлыҡҡа килгән батша администрацияһы баҫымы, руханиҙар өҫтөнән үтә ныҡ контроль, дини йәберләү арҡаһында күп кенә башҡорт мосолмандары ситкә сығып китергә мәжбүр була. Уларҙың ҡайһы берәүҙәре хатта Яҡутстанға барып сыға һәм унда беренсе булып Ислам динен ерләштереүгә ирешә. Мәҫәлән, Эске эштәр министрлығының Дини идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, Яҡутстанда 1913 йылда 1172 мосолман йәшәй, шуларҙың 516-һы башҡорт, 69-ы ҡырғыҙ һәм 42-һе татар була. Тимәк, Себерҙә башҡорттар электән йәшәгән һәм башҡорт гуманитар ғилеме алдында уларҙы ентекләп өйрәнеү мәсьәләһе тора.

**Айбулат ПСӘНЧИН, география фәндәре докторы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Башҡорт-мадьяр концепцияһы

Күп кенә авторҙар, шулай уҡ Башҡортостан ғалимдары башҡорттарҙы венгрҙар тарихы менән бәйләй, был осраҡта улар венгрҙарҙы төрки халыҡтар төркөмөнә индерә. Тикшеренеүселәр тарафынан бер нисә тапҡыр үткәрелгән башҡорт-венгр лингвистик параллелдәре, хәҙерге Венгрия территорияһында Һаҡмар, Тоҡсаба, Тазлар һ.б. топонимдары, юрматы, йәнәй, тарҡан башҡорт ырыуҙары атамалары XI быуат уртаһында боронғо башҡорттарҙың бәшәнәк ҡәбиләләре составында Паннония ерenә күсенеүен дәлилләй. Бәшәнәктәр батшалығы Йайыҡтан Днепрға һәм Бугҡа, Каспий диңгеҙенән Кавказдың көньяҡ түбәләренә, урта Волгаға һәм Окаға тиклем ерҙәрҙе биләгән. Ҡыҫырыҡланған мадьярҙар Атель иленә күсенеп (Атель төркисәнән Иҙел, йылға тигәнде аңлата), унда славяндар өҫтөнән хакимлыҡ итә, уларҙы ҡол итеп һата. Хәүефле бәшәнәктәр менән күршеләш йәшәү арҡаһында мадьярҙар 840 йылда хазарҙар менән килешеү төҙөп, улар етәкселегендә венгрҙар тағы ла 20 йыл һуҙымында үҙенең Европалағы ватаны, Дондың көнсығышындағы Лебедияға хоҡуғы өсөн дәғүә белдерә ала. Венгрҙар 862 йылда был ерҙәрҙе ташлап китә.

Ҡайһы бер ғалимдар тарафынан венгрҙар менән башҡорттар шәжәрәләре параллелдәрен килтереү ҙур буталсыҡлыҡҡа алып килә. Л.Гумилев бер этностың икенсеһенән барлыҡҡа килмәүен, бының өсөн тағы ла бер, өсөнсө халыҡтың йоғонтоһо талап ителеүен иҫбатлаған. Тарихи материалдарҙа башҡорттарға ниндәйҙер бер халыҡтың йоғонто яһап, шуның һөҙөмтәһендә мадьярҙар (венгрҙар) барлыҡҡа килеүе хаҡында дәлил юҡ. Т. Левицкий башгирдтар ғына түгел, шулай уҡ маджгарҙар (мишәрҙәр), унгарҙар, төркиҙәр һ.б. иң тәүҙә фин-уғыр телле мадьярҙар булған, тигән һығымтаға килә. Левицкий һығымтаһының нигеҙле булыуын "СССР археологияһы" материалдары раҫлай. Уларҙан шул билдәле: Обь уғырҙары менән көнбайыш Себерҙә һәм Уралда күршеләш йәшәгән венгрҙар уғырҙарға ҡарай. Венгр теле уғыр төркөмөнә ҡарай. Венгрҙарҙың ата-бабалары беҙҙең эраның 1-се меңйыллығында уғырҙарҙан айырылып, һун хәрәкәте менән бергә көнбайышҡа китә (Гарниах, Кочагир и Забенер). Венгрҙарҙың ата-бабалары һундар, уларҙың бер өлөшө Урал аръяғындағы һәм Иртыш буйындағы Обь уғырҙары менән ҡушылған.

**(Дауамы бар).**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# КЕМ УЛ ШӘҒӘЛИ ШАҠМАН?



**Белорет районының Ҡаһарман ауылында РСФСР-ҙың мәғариф отличнигы, аҡһаҡал Ҡасим Нафиҡовтың "Шәғәли Шаҡман төйәге - Ҡаһарман" китабының исем туйы уҙҙы.**

Шәғәли Шаҡман тарихи яҡтан ҡыҙыҡлы, халыҡ хәтеренә һәм бөйөк данға лайыҡ шәхес. Ул Башҡортостандың беренсе дипломаты һәм беренсе тыныслыҡ урынлаштырыусы. Ул 16-сы быуатта уҡ тик берҙәмлектә көс тип иҫәпләгән һәм халҡын тыныслыҡ, именлек менән тәьмин иткән, уларҙы аҡрынлап урынлы йәшәү рәүешенә күсергән. Нәк Шәғәли Шаҡман бей, Тамъян ырыуы башлығы, көньяҡ-көнсығыш башҡорттарын Рус дәүләтенә башлап ҡушыусыларҙың һәм етәкселәрҙең береһе, Тамъян башҡорттарының Нуғай мырҙаларына ҡаршы көрәшен етәкләгән кеше. 1555 йылдар аҙағында - 1556 йылдар башында Шәғәли Шаҡман берләшкән көньяҡ-көнсығыш башҡорттары илселеге составында һөйләшеү өсөн Ҡазанға батша наместнигына барған. Һөҙөмтәлә тамъяндар Рус дәүләтенә ҡушылған һәм 1557 йылда Иван IV батшанан ерҙәр биләмәһенә эйә булыуға хоҡуҡ грамотаһы алған. Шәғәли Шаҡманға "Тархан" исеме бирелгән.

2019 йылда Шәғәли Шаҡмандың тыуыуына 500 йыл тула. Шуның менән бәйле Белорет районының үҙәк китапхана системаһы Ҡаһарман ауылы китапханаһы нигеҙендә Шәғәли Шаҡман исемендәге Мәғлүмәт үҙәге ойоштороҙо. Унда тарихи шәхескә ҡағылған бөтә мәғлүмәт йыйылған. Юбилей датаһына "Шәғәли Шаҡман - халыҡ дипломаты һәм тыныслыҡ урынлаштырыусыһы" библиографик белешмәһе сығарыу ҡуҙаллана. Уға халыҡ геройына һәм шул осорҙа йәшәгән башҡорттарҙың тормошона ҡағылышлы баҫылып сыҡҡан бөтә материалдар инәсәк. "Быңдай китап сығарыу күптәнге теләгем ине, - ти китап авторы Ҡасим Нафиҡов. - Унда легендар шәхес, Тамъян ырыуы кенәзе Шәғәли Шаҡман, Ҡаһарман ауылы тарихы һәм унда йәшәүселәр хаҡында тарихи материалдар тупланған. Был китапты сығарыуҙа ауылдаштарымдың, староста Элзира Ғәлинаның һәм Дауыт Юлтый исемендәге китапхана хеҙмәткәрҙәренең ҙә өлөшө ҙур. Китап ике дәүләт телендә сыҡты. Уны башҡортсанан рус теленә яҙыусы Гөлсөм Мостафина тәржемә итте. Ваҡытында ауылыбыҙҙа ҡунаҡта булған Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим хаҡлы һүҙҙәр әйткәйне: "Үҙегеҙҙең геройығыҙ - Шәғәли Шаҡман менән ғорурланығыҙ! Сөнки нәк ул бында йәшәгән һәм ерләнгән, уның батырлығын йәш быуын хәтерләргә тейеш".

**✓ *Ҡапыл ғәйрәтле һәм моңло тауыш менән бәрәү "Урал"ды йырлап ебәрмәһенме! Күңелгә йылы йүгерҙе. Йырсының көслө аһәңе трамвай тәҙрәләрен зыңғылдатты. Салонда себен осҡан да тауыш ишетелмәй.***

# ҠУРАЙСЫЛАР

## Әҙһәм Динислам улы

**XIX быуатта йәшәүсе немец яҙыусыһы Вильгельм Раабе - "Матурлыҡ, ысын бәхет менән ысын батырлыҡ матур һүҙҙәргә мохтаж түгел", ә мәшһүр немец ғалимы Альберт Эйнштейн иһә "Һәр даһилыҡ ябай була" тигән. Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы Әҙһәм Динислам улы Исҡужинды иҫкә алғанда иң тәүҙә ошо ике шәхестең матурлыҡ, бәхет, батырлыҡ һәм даһилыҡ хаҡында әйткән һүҙҙәре иҫкә килеп төштө. Юҡҡа ғына түгелдер. Ни өсөн тигәндә, булмышы менән ябайҙарҙан-ябай, тәбиғәттең үҙе кеүек үтә лә самими, атҡарған ғәмәлдәре менән ҡаһарман йөрәкле, фиҙаҡәр рухлы, баһадир һын-һыпатлы ине Әҙһәм ағай. Шәхесенең ҡаһарманлығы, ысынлап та, матур һүҙҙәргә мохтаж да түгелдер, сөнки кем бәрәү әйтмешләй, "Һәр бер сағыштырыу аҡһай", улай ғына ла түгел, донъяла һүҙ менән генә ҡылыҡһырлап, аңлатып булмаған төшөнсә-күренештәр ҙә була. Әйтәйек, моңдо һүҙҙәр менән нисек итеп аңлатаһың? Тап шулай, тотошлайы менән моңдан ғына ҡойолғайны уның булмышы, моңдан туҡылғайны уның шәхесе. Шуның өсөн дә беҙ ҡурай, башҡорт моңо, тигәндә - Әҙһәм Исҡужинды, Әҙһәм Исҡужин тигәндә - ҡурайыбыҙҙы, тыуған моңдарыбыҙҙы күҙ алдына килтерәбеҙ. Ана шундай шәхестәребеҙҙең береһе булды ул.**

**Арҙаҡлы ил ағаһы хаҡындағы иң тулы мәғлүмәт тупланған китаптың исеме "Әҙһәм ҡурайы"("Китап". 2009. Төҙөүселәре: Ф.Ш. Ҡоҙаҡаев, Ю.И. Ғәйнетдинов, китапҡа ҡушылма компакт-диск Әкрәм Алдаров ярҙамы менән әҙерләнә) тип аталыуы ла юҡҡа ғына түгелдер. Уны тыуыуына 80 йыл тулған саҡта уҡыусылары әҙерләп сығарған. Китапта ҡурай сәнғәтен тергеҙеү, һаҡлау һәм уны яңы юғарылыҡтарға күтәреү өсөн күп көс һалған шәхес хаҡында замандаштарының, хеҙмәттәштәренең һәм уҡыусыларының иҫтәлектәре, шулай уҡ Әҙһәм Исҡужиндың хәтирәләре урын алған. Шуға күрә уның шәхесе хаҡындағы күпселеккә таныш булған мәғлүмәттәрҙе ҡабатлап тормайынса, ҡайһы бер фекерҙәремде генә яҙып үтергә булдым.**

### "Әҙһәм йолаһы"

Ауылдаштары һөйләүенсә, Әҙһәм ағай Темәскә ҡайтҡан сағында мотлаҡ рәүештә тыуған ауылының зыяратына инеп, атай-олатайҙарының, Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙарының, туғандарының ҡәберҙәре янында доға ҡылып, һәр ҡәбер янында оҙаҡ ваҡыт уйға батып, тын ҡалып, һуңынан "Урал", "Әрме" йырҙарын башҡарып, тик үҙенә генә хас йолаһын атҡарыр булған. Уның көслө һәм моңло тауышы ауылға яңғырап ишетелеп торған. Халҡыбыҙ, ватаныбыҙ өсөн йәнен фиҙа ҡылған аҫыл заттарҙың әруахтары өсөн ошонан да ҙурыраҡ ихтирамдың булыуы мөмкинме икән? Ни тиклем оло фиҙаҡәрлек, илһөйәрлек, илаһилыҡ, оло быуынға илтифат, әруахтар рухына иғтибар, ҡәҙер-хөрмәт сағыла Әҙһәм Исҡужиндың ошо изге ғәмәлендә. Дини күҙлектән ҡарағанда, бәлки, зыяратҡа инеп йырлау ситен дә булып тойолор, әммә баҡыйлыҡҡа күсеп, ошондай аҫыл көйҙәребеҙҙе башҡарыуҙан һәм тыңлауҙан мәхрүм ҡалған изге заттарыбыҙ әруахтарына был мөмкинлекте бүләк итеүҙе тере йәндең рухи ҡаһарманлығы тип атарға ғына мөмкиндер. Башҡорт өсөн моңдан мәхрүм ҡалыуҙан да ҙурыраҡ юғалтыу бармы икән был донъяла? Юҡҡа ғына Мостай Кәрим үҙенең бер яҙмаларында шулай тип яҙмаған: "Мин ғүмер буйы боронғо йырҙарҙы яраттым. Теге донъяла йырлайҙармы икән? Йырламаһалар, бик ҡыҙғаныс. Күңелһеҙ булыр" (Көндәлек. - 18. 02. 2002).

Арҙаҡлы шәхесебеҙҙе яҡындан белеүселәрҙең, уның менән бер-ике тапҡыр булһа ла осрашыусыларҙың һәр ҡайһыһы уның бәләкәй генә ғәмәл-ҡылыҡтарында ла оло фиҙаҡәрлеген, ҡаһарман рухының сағылышын күреүе хаҡында һөйләй. Был, әлеге лә баяғы, ябайлыҡтың бөйөклөгө хаҡындағы һүҙҙәрҙең раҫлығын дәлилләй. "Әҙһәм ҡурайы" китабының бите һайын бар ундай яҡты һәм йылы хәтирәләр, иҫтәлектәр. Шағирә Рәсимә Ураҡсинаның иҫтәлектәренән бер өҙөк: "Әгәр ҙә ул, осоусы булыуын ташлағас, аэропортҡа барып эшкә урынлашҡан булһа - ә бит уның тулы хаҡы бар ине - беҙҙең башҡорт милләте ниндәй ҙур юғалтыу кисерер ине! Әҙһәм ағайҙың ҙур аҡса, башҡа нәмәләр тураһында уйламай, бына шунда, ул ваҡытта ҡанат нығытып ҡына килгән, башҡорттоң йөҙәк ҡашы булған мәктәпкә килеп урынлашыуы беҙҙең халыҡ өсөн шундай ҙур бәхет булған - уны йылдар үткәс бигерәк ныҡ аңлайһың. Беҙҙең йәшәгән бүлмә тәҙрәләре менән ҡапҡаға ҡарап тора һәм мин йыш ҡына Әҙһәм ағайҙың ҡапҡанан килеп ингәнен күҙәтә инем. Ул шундай һалмаҡ ҡына итеп, сәбәләнмәй, матур ғына атлап үтә, оҙаҡламай мәктәпкә барһаң, ҡурай тауышы ишетелә башлай. Мин үҙем дә белмәйем, ни өсөндөр бала ваҡыттан күңелем менән гел Әҙһәм ағайға тартылып йәшәнем. Уның шул хәтлем ябайлығы, балаларға яҡынлығы! Ҡайһы бер тәрбиәселәр ошонда эшләгән ваҡытта бала менән ысын күңелдән ихлас һөйләшеүҙе, уның күҙ йәштәрен һөртөүҙе абруйҙы юғалтыу тигән нәмә һымаҡ итеп ҡаранылар. Ә бит Әҙһәм ағай беҙҙең күҙ йәшебеҙҙе генә һөртмәгән, күңелдәребеҙгә халыҡтың ысын милли холҡон һала белгән. Миңә ҡалһа, Әҙһәм ағай милли холоҡто, ҡурай моңона ҡушып, беҙҙең егеттәргә бүләк иткән..."

Йәки булмаһа, тыуған ауылына ҡайтып төшөүенә бәйле бына тағы ла бер бәләкәй генә хәтирә. Ҡустыһы Әғзәм Исҡужин һөйләй: "Ауылға килә, бер яҡҡа сыҡтынниһә, бергә арбаға ултырып китәбеҙ. Тап булған һәр бер баланың, һәр бер олоноң хәлен һораша, ауылды сығып киткәнсе, ярты көн үтеп китә торғайны. Һәр ҡайһыһына кәңәш бирә, Өфөләге адресын, эш урынын биреп сығара, ярҙам итергә һәр саҡ әҙер булды. Өфөгә барып, уның ярҙамын күргән кешеләр, туҡтап, үҙҙәре рәхмәт әйтә торғайны. Ә ауылды сыҡҡандан һуң башлана оҙон көйҙәр. Шул иртән китеп барғанда йырлай башлай, барып етә, ҡайта. Көнө буйы ул нисек арымаған, нисек талмаған, ҡайҙан көс тапҡан?.."

Киләсәктә уның хаҡында ошо "Әҙһәм ҡурайы" кеүек китап яҙыла ҡалһа, ул мотлаҡ яҙылыр ҙа, унда шәхесебеҙҙең "Әҙһәм йолаһы"на хас тағы ла әллә күпме изге ғәмәлдәре хаҡында телгә алыныр. Уның менән аралашып йәшәгән кем менән генә һөйләшһәң дә, барыһы ла уны нәҡ ошо сифатында һағынып иҫкә ала. Сөнки "Әҙһәм йолаһы" - ул кешелеклелек, изгелек йолаһы, дуҫ, туған ҡәҙерен белеү, милли рух, фиҙаҡәрлек, ҡаһарманлыҡ йолаһы.

### Милләт феномены

Үҙем дә уның менән бәйле булған ике генә ваҡиға хаҡында әйтеп үткем килә. Әле Әҙһәм ағайҙы ишетеп һәм алыҫтан ғына ишетеп-күреп белгән саҡта көҙҙөң ырашҡылы бер шөҡәтһеҙ кисендә "Өфө-Сибай" поезына яҡын туғанымды оҙатырға барҙым. Хушлашып, поезд ҡуҙғалып киткәс, ҡалаға күтәрелер өсөн трамвайға эләгә-һарҡа саҡ-саҡ ултыра алдым. Тимер ат нышып тултырылғандай. Этештөртөш. Ҡысҡырыш. Һүгенеү тауыштары. Етмәһә, көн торошо пассажирҙарҙың кәйеф-торошонда туранан-тура сағылыш тапҡан. Кемдер тәбиғәтте, кемдер ҡала түрәләрен әрләй...

Шул саҡ барыһын да кинәт тынып ҡалырға, ауыҙҙарын шапылдытап ябырға, тын алырға онотоорға мәжбүр иткән бер күренеш булды. Ҡапыл ғәйрәтле һәм моңло тауыш менән бәрәү "Урал"ды йырлап ебәрмәһенме! Күңелгә йылы йүгерҙе. Йырсының көслө аһәңе трамвай тәҙрәләрен зыңғылдатты. Салонда себен осҡан да тауыш ишетелмәй. Йыраусы көйҙөң бер бүгөлөн тамамлап, икенсегә тын ялғаған арала бер-ике секунд тынлыҡ арауығында трамвай тәгәрмәстәренең туҡылдағы ғына ишетелеп ҡала. Бер туҡталыш үттек, икенсе туҡталыш, бер аҙҙан тимер ат Ленин урамынан Революция урамына боролош яһай. "Үҙәк баҙар" туҡталышына килеп етәрәк йырсы көйҙөң һуңғы ноталарын яңғыратҡас, трамвай халҡы дәррәү рәүештә ҡул сабырға, йырсыға үҙенең һоҡланыуын еткерергә тотондо. Туҡталышта байтаҡ халыҡ төшөп ҡалды. Шул саҡ ҡына урталыҡта тау кеүек баҫып торған Әҙһәм Исҡужинды таныным. Яҡташым янына барҙым. Шунда таныштыҡ. Ҡосаҡлап уҡ алды. Таңһылыу еңгәйҙе поезға оҙатҡан икән.

Таңһылыу еңгәй, тигәндән, 1998 йылда ул миңә эшкә шылтыратып, ниндәйҙер мәсьәлә хаҡында һөйләшергә кәрәк, тип саҡырғайны. Барҙым фатирҙарына. Ғалимә Таңһылыу Күсимова ауырып түшәктә ята. Мине Әҙһәм ағай ҡаршыланы. "Баймағым ҡунаҡҡа килде", тип, ишектән ингәс тә үк ҡосаҡлап алды. Баҡтиһәң, мине ул оло ҡунаҡ итеп хөрмәтләргә махсус



# ҠАРТАТАҺЫ -

## Исҡужин

әҙерләнеп көткән икән. Әҙерләгән табынында ҡош һөтөнән башҡа барыһы ла бар ине. Бишбармаҡҡа һалманы үҙебеҙсә, баймаҡса, шаҡмаҡ итеп үҙ ҡулдары менән тураған. Ҡыш ваҡыты булыуға ҡарамаҫтан, ҡымыҙын да, емеш-еләген дә, башҡаһын да тапҡан. Мине үҙ ғүмеремдә атайымдан өлкән икенсе берәүҙең ошо рәүешле итеп үҙ ҡулы менән табын әҙерләп ҡаршылағаны һәм ҡунаҡ иткәне булманы. Талантлы кеше һәр йәһәттән дә талантлы, тигәндәй, был юлы Әҙһәм ағай миңә аш-һыу әҙерләү, килештереп ҡунаҡ һыйлау оҫталығын күрһәтте. Әллә нисек ине, алпамышалай ил ағаһының кем берәүгә хөрмәт күрһәтәм, тип, ҡала фатиры эсендә йүгермәләп йөрөүе. "Борсолма, ағай", тип әйтеүемде ишетергә лә теләмәй, икенсенән, уның ихтыярына ҡаршы тороуы мөмкин дә түгел ине. Өсөнсөнән, Әҙһәм ағай һиңә шундай итеп хөрмәт күрһәтә, уның ҡунағы булыуыңа ҡыуанаһың, милләттәше булыуыңа шатланаһың, уның рухи атына атланаһың. Халҡыбыҙ ҡунаҡсыллығының милли рухыбыҙҙы күтәрер сара икәнен шунда нығыраҡ аңланым. Яһалмалыҡтың осмото ла юҡ, ихласлыҡ, эскерһеҙлек, ябайлыҡ - хужаның тап ошо сифаттары ҡунағына күсә.

Беҙ Таңһылыу Хажим ҡыҙы менән төпкө бүлмәлә әңгәмәләштек. Был осрашыуҙа шуныһы үҙенсәлекле булды: ғалимә мине үҙе янына шундай мәсьәләне асыҡлар өсөн әңгәмәгә саҡырған икән. Ул да булһа - "Баймаҡ феномены". Был күренештең асылы, сәбәптәре, тарихи нигеҙҙәре хаҡында барҙы һүҙебеҙ. Ғалимә үҙ дәлилдәрен килтерә, мин үҙемдекен әйтәм. Әҙһәм ағай әленән-әле беҙҙең әңгәмәне өҙөп, әле бер төрлө, әле икенсе төрлө һыйы әҙер булғас, табын янына саҡыра. "Аһ-аһ, Таңһылыу, ҡунағыбыҙҙы асыҡтырабыҙ бит, һин уны хәбәр менән һыйлайһың", - тип бүлмәбеҙгә килә лә инә, килә лә инә. Сираттағы тапҡыр табын янына саҡырғас, мин Әҙһәм ағайға ишаралап:

- "Баймаҡ феномены" тип әйтәһегеҙ, Баймаҡ феномены бына ошолай була инде, - тинем. Баймаҡ ҡына түгел, милләтебеҙ феномены ине Әҙһәм Исҡужин.

### Рухиәт көрәшсеһе

Һабантуйҙарҙың бил бирмәҫ батыры булған Әҙһәм ағай. Уның майҙанға көрәшергә сыҡҡанын баймаҡтар шулай хәтерләй: алпан-толпан атлап, майҙанға сыға. Дәғүәсеһенә иғтибар ҙа итмәй, йәғни кем менән көрәшһә лә, уға барыбер, сөнки барыбер ул еңәсәк. Шунан һуң таҫтамалының ике осонан тотоп, уны ике яҡҡа тартып, ныҡлығын һынап ҡарай, йәнәһе, өҙөлөрлөк түгелме. Артабан дәғүәсеһенең биленә таҫтамалын һала ла, уны оҙаҡ этләтмәй генә күтәреп, һирпеп ебәрә. Хәрби осоусыға уҡығанда, һуңынан хеҙмәт иткәндә лә төрлө төр көрәштәр буйынса һәр ваҡыт еңеүсе булып йөрөгән.

Әҙһәм Исҡужиндың 90-сы йылдарҙағы сәйәси көрәштә нисек ҡатнашыуы хаҡында замандашы Марат Хафизовтан ҡыҫҡа ғына бер хәтирә: "90-сы йылдар башында беҙҙең халыҡ суверенитет өсөн ҡеүәтле, көслө көрәш башлаған йылдар ине. Бында беҙҙең башҡорт егеттәре бик ҙур ҡыйыулыҡ, иҫ киткес ҡыйыулыҡ күрһәтте. "Йәшлек" гәзитендә һүрәттәре менән бирелгән шундай хәбәр уҡыным. Университет менән телевидение араһында буш майҙан була торғайны ул йылдарҙа. Шунда беҙҙең йәштәр палаткалар ҡороп, суверенитет өсөн аслыҡ иғлан итеү акцияһы ойошторғандар ине. Шулар араһында Әҙһәм Исҡужиндың да фамилияһын күреп ҡалдым. Икенсе көндә, мин әйтәм, туҡта әле, ысын хәл микән? Киттем шул урынға. Ысынлап та, Әҙһәмдең палаткаһы тора. Оло кешегә үҙенә айырым палатка инде. 60 йәштән үткән ир 17-20 йәштәге егеттәр менән "аслыҡ акцияһы" үткәреп ята. Үҙ күҙҙәрем менән күрҙем уны..."

Борон-борондан халҡыбыҙҙа ҡаһарман заттарҙы тауҙарға тиңләгәндәр. Урал батырыбыҙҙың исеме менән аталған Урал тауҙары бының иң сағыу миҫалы. Әҙһәм ағайҙың уҡыусыһы Дауыт Амангилдин остазын ауылы янындағы тауға тиңләй:

"Мин был кешене үҙемдең тыуған ауылым эргәһендәге Мөлкаман тауы менән сағыштырам. Был тау, бер ниндәй касафатҡа ҡарамайса, үҙенә тәғәйен эште йөҙәр, меңәр йылдар башҡарыуын дауам итә. Дауылын да, ғәрәсәтен дә үткәрә, йәшендән, ел-бурандан ауылымды ҡурсалап тора. Тамырҙары тәрән уның, ныҡ тора - аумаҫ бер ҡасан да. Йөрөмәй генә, тиһәң, йөрөй. Ер менән бергә әйләнә бит. Әҙһәм батыр ҙа изге ниәт менән башҡорт илен арҡырыға-буйға йөрөнө. Башҡортостандан тыш, Һарытау йә Һамар яҡтарында ла, Туҡсоран, Арғаяш, Әлмән, Барҙы ерҙәрендә лә, алыҫ төньяҡта көн иткән ҡәрҙәштәребеҙ янында ла халҡыбыҙ рухын таратып йөрөргә насип булды уға..."

Рухиәт көрәшсеһенең 90-сы йылдарҙағы тынғыһыҙ эшмәкәрлеген "Яҙмышнамә" тип аталған хәтирәләренең ошо өҙөктәрендә лә тойорға була:

-Ҡаҙағстан президенты Нурсолтан Назарбаевҡа бирер өсөн ҡурай, пластинкаларым бар ине. Ҡулымды күкрәгемә ҡуйып, баш әйҙем дә, бүләктәремде тапшырҙым. "Һеҙ үҙегеҙ уйнай беләһегеҙме?"- тип һораны Назарбаев. "Урал"ды уйнаным. Ул, күкрәгенә ҡулын ҡуйып, "Ҙур рәхмәт!" тине;

- Каруанһарайҙы ҡайтарып биреүҙәрен һорап, Рәсәй башлығы Б. Ельцинға хат яҙҙыҡ. Әлеге шул Каруанһарайҙы дауайлап, Өфөләрҙән барып митинг ойошторҙоҡ. Педучилищела сығыш яһаным. Каруанһарайҙың акттар залында 3,5 сәғәтлек лекция-концерт бирҙек;

- Ырымбур өлкәһенең башҡорт ауылдарында сығыштар яһаныҡ. Һунарсы ауылына ҡурай өйрәтергә барып, илай-илай ҡайтып киттем. Аҙаҡ был турала "Башҡортостан" гәзитендә "Оҙаҡ йәшәйем, тиһәң, балалар уҡыт" тигән мәҡәләм баҫылды.

Хәтирәләренән алынған был саралар рухиәт көрәшсеһе Әҙһәм Исҡужиндың тынғыһыҙ эшмәкәрлегенең меңдән бер өлөшө лә түгелдер.

### Ҡурайсы намыҫы

Әҙһәм ағайҙың юҡлығы һуңғы йылдарҙа, бигерәк тә ҡурайыбыҙға уңдан да, һулдан да яҫҡыныусылар күбәйгән ваҡытта ныҡ һиҙелә. Әммә бер хәҡиҡәт бәхәсһеҙ: ҡурай башҡорт рухынан, уның милли булмышынан, асылынан, тарихынан айырылғыһыҙ. Бәлки, булмаған тарихты бар, тип яҙып та булалыр, әммә икенсе берәүҙең фажиғәле яҙмышы аша тыуған әрнеүен, һыҙланыуын үҙләштереп булмай. Шуның өсөн дә ҡурай үҙенең серен тик башҡорт рухы аша ғына асасаҡ, башҡалар ҡулында иһә ул һыбыҙғы ғына булып ҡаласаҡ. Был хаҡта Әҙһәм Исҡужин "Ҡурайсы намыҫы" ("Башҡортостан". 12. 11. 1999 йыл) тигән мәҡәләһендә теге быуатта, улай ғына ла түгел, теге эрала уҡ яҙып ҡалдырған: "Ҡурайҙы "биш кенә тауышы бар, хан заманынан ҡалған көтөүсе ҡоралы", тип хурлаусы ла үҙебеҙҙең аранан сыҡты бит. Һайлауҙарҙа халҡыбыҙ мәнфәғәтен яҡлаусы альтернатив кандидатҡа ярҙам итеп, башҡорт ауылдарында боронғо йыр йырлап, ҡурай уйнап йөрөүселәр ҙә булманы түгел, булды: инаныуы буйынса түгел, аҡса өсөн. Шул уҡ аҡса өсөн ҡурайҙы иблистең үҙенә өйрәтергә әҙер булғандар ҙа юҡ түгел. "Каруанһарай" төркөмө егеттәре һөйләгәненән: беҙгә килеп, ҡурай буйынса махсус белем алып ҡайтҡан ҡаҙаҡ егете Тәлғәт Муҡышев бөгөн башҡорт халыҡ көйҙәрен ҡаҙаҡ көйө тип иғлан итеп уйнап йөрөй икән. Был күренеште халыҡ-ара кимәлдә уғрылыҡ тип атаһаң да артыҡ булмаҫ...

Ҡурайсы этикаһы, ҡурайсы намыҫы тураһында уртаға һалып һөйләшергә ваҡыт. Быуаттар аша атай-олатайҙарыбыҙ беҙгә Ҡурайсы тигән оло исемде һаҡлап килтереп еткергән икән, бөгөн беҙ шуны етди аңларға тейешбеҙ: Ҡурайсылар союзында ҡурайсы намыҫына, хәҙергесә әйткәндә, Ҡурайсы кодексына тап төшөрөүселәр ағза була алмай..."

Әҙһәм Исҡужин әжеренең хаҡын юл сығымдарын ҡапларлыҡ ҡына итеп ҡуйып, республикабыҙ ауылдары һәм ҡалалары, сит өлкәләр буйлап балаларға ҡурай дәрестәре биреп йөрөгән. Бөгөн иһә уның уҡыусылары үҙҙәре үк урындарҙа үҙҙәренең уҡыусыларын булдырған. Социаль селтәрҙәрҙә ағымдағы 2018 йылды Ҡурай йылы итеп атарға тигән тәҡдимдәр барлыҡҡа килде. Унда һәр бер башҡорт ғаиләһендә ҡурай һәм унда уйнаусылар булыуы маҡсаты ҡуйыла. Бик ваҡытлы тәҡдим. Дөрөҫөн әйткәндә, Әҙһәм Исҡужин был изге ғәмәлде әллә ҡасан уҡ башлаған, тик уның эшен дауам итеү генә талап ителә.

Хәтирәләренән алынған был саралар рухиәт көрәшсеһе Әҙһәм Исҡужиндың тынғыһыҙ эшмәкәрлегенең меңдән бер өлөшө лә түгелдер. Уҡыусыһы Юлай Ғәйнетдинов хаҡлы рәүештә остазын "Ҡурайсылар атаһы" тип атай. Ул тәрбиәләгән ҡурайсылар инде күптән үҙҙәренең уҡыусыларын тәрбиәләгән, үҙ мәктәбен булдырған. Тимәк, хаҡлы рәүештә Әҙһәм Исҡужинды "Ҡурайсылар ҡартатаһы" тип атарға булалыр. Быуындар күсәгилешлелегенең ошондай силсиләһе йәшәгәндә ҡурайыбыҙ мәңге йәшәйәсәк.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП:*

1999 йылда ҡурайсыларҙың 1-се съезы үткәрелде. Ҡурайсылар берлеге идараһы рәйесе итеп йәш, талантлы ҡурайсы, һәләтле тележурналист, һоҡланғыс саф күңелле кеше, Өфө дәүләт сәнғәт институты уҡытыусыһы Вилдан Йомағужин һайланды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Вилдан йәш кенә көйөнсә яҡты донъяны ҡалдырып китте. Бөгөн Күгәрсен районында Вилдан Йомағужин исемендәге призға ҡурайсыларҙың төбәк бәйгеһе үткәрелә. 2007 йылда үткәрелгән 2-се Ҡурайсылар съезында, башҡа төрлө ҡарарҙар менән бергә, беҙҙеңсә, үтә лә мөһим бер документ ҡабул ителде. "Ҡурайсы кодексы" тип атала ул. Ҡурай сәнғәте - халҡыбыҙҙың рухи донъяһын һутландырған моң шишмәһе һәм ул айырыуса сафлыҡты талап итә. Был турала үткән быуаттың аҙағында беренсе булып мәшһүр ҡурайсы-остаз, йырауысы, оло йөрәкле шәхес Әҙһәм Исҡужин саң ҡаҡты. Йәшерен түгел, бөгөн ҡурайҙы үҙләштереүҙе маҡсат итеп ҡуйған сит ҡәүем вәкилдәре хасил булды, шул уҡ ваҡытта ҡулына ҡурай тотоп йөрөүсе милләттәштәребеҙ араһында кәсепселәр ҙә юҡ түгел, улар инде аҡса өсөн кемгә булһа ла ҡурайҙа уйнарға өйрәтергә әҙер. Әҙһәм ағай 2003 йылда арабыҙҙан китеп барҙы, әммә уның юлын дауам итеүсе күп һанлы уҡыусылары ҡалды. Шуларҙың икәүһе, атап әйткәндә, Ырымбур өлкәһенән Дауыт Амангилдин һәм Өфө ҡалаһынан Рөстәм Рәжәпов остаздарының идеялары нигеҙендә "Ҡурайсы кодексы"ның проектын әҙерләне. Был проект ҡурайсылар съезында бер тауыштан ҡабул ителде.

### Ҡурайсы кодексы

**Ҡурайсы исеменә лайыҡ булған кеше түбәндәге ҡанундарҙы ҡабул итергә тейеш:**

1. Һис бер ваҡыт халҡының рухи-мәҙәни мираҫын һаҡлаусы, милләтенең әхлаҡи намыҫының тере сағылышы булыуын онотмаҫҡа;
2. Ватанын һөйөргә, унда йәшәгән барлыҡ халыҡтарҙы ла тигеҙ хөрмәт итергә, халҡының һәм иленең патриоты булырға;
3. Һәр ерҙә үҙен лайыҡлы тоторға, үҙе өлгөһөндә халҡына, уның тарихына, мәҙәниәтенә, сәнғәтенә ихтирам уятырға;
4. Белемен камиллаштырыу өҫтөндә даими эшләргә, халҡы тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнергә һәм башҡаларға өйрәтергә, бар урында пропагандаларға;
5. Ил тарихын, ырыу-ғаилә шәжәрәһен белергә, киләсәк быуынға өйрәтергә, ғаиләлә, йәмәғәт урындарында балаларҙы шәхес итеп тәрбиәләүгә бар көсөн һалырға;
6. Башҡорт йыр-көй мираҫын даими өйрәнергә, халыҡсан көйөнсә һаҡларға һәм артабанғы быуындарға тапшырырға;
7. Ата-бабаларыбыҙҙың меңәр йыллыҡ ижади тәжрибәһе нигеҙендә барлыҡҡа килгән һәм ошо көнгәсә килеп еткән ҡурайҙы камиллаштырыу һылтауы менән изге ҡомартҡыны үҙгәртеүгә, асылда һыбыҙғыға әйләндереүгә, ҡурайҙан айырмаһы булған музыка ҡоралдарына "ҡурай" атамаһы биреү ынтылышына юл ҡуймаҫҡа;
8. Ҡурай - башҡорт халҡының милли хазинаһы, Башҡортостан дәүләтселегенең символы булыуын һәр саҡ иҫтә тоторға, уны ситтәрҙең үҙләштереүенә юл ҡуймаҫҡа;
9. Ҡурай һәм ҡурайсы исемен һаҡларға, был төшөнсәләргә тап төшөрмәҫкә, тар мәнфәғәттәрҙән сығып эш итергә ынтылыуҙарға юл ҡуймаҫҡа;
10. Ҡурай үләненең үҫкән урыны - изге Урал тауҙарын, тәбиғәтен һаҡларға;
11. Ҡурайсылар һәм ҡурай моңон яратыусылар мөхитен арттырыуҙа, киңәйтеүҙә ҡыйыу эш итергә;
12. Үҙеңдән алда йәшәгән ҡурайсыларҙы, уларҙың ижадын белергә, хөрмәт менән иҫтә тоторға, мөмкин булғанса уларҙың шәхестәрен мәңгеләштерергә тырышырға.

***✓ Үҙем икмәк һала белмәгәс, күрше инәйҙәрҙән өйрәнеп, яҙып алып бешерәм икмәкте. Бөтәһен дә дөрөҫ эшләйем кеүек. Ләкин икмәгем күбеп бешер урынға, сөсө икмәк һымаҡ ялпашып килә лә сыға мейестән.***



*ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ*

# ИКМӘК



Һөйөклөм менән ике йыл ярым дуҫлашып, яратышып йөрөп өйләнешһәк тә, бергә тормош көтөп алып китеүе шыма ғына булманы. Бер-беребеҙҙе ныҡ һөйә, беребеҙ өсөн беребеҙ утҡа-һыуға инергә әҙер, йән атып тора инек. Һүҙһеҙ генә, күҙ ҡараштары менән аңлашып, уйҙарыбыҙҙы уҡып ҡына беребеҙ икенсеһененең хәл торошон белеп, күреп йөрөр ине. Бер-беребеҙҙе беҙҙән дә яҡшы белгән кеше юҡ һымаҡ тойола торғайны.

Ә барыбер ваҡыты-ваҡыты менән ғорурлыҡ, үҙһүҙлелек, ҡаршылашыу тигән яман ғәҙәттәр өҫтөнлөк алып, арабыҙҙа ҡытыршылыҡтар тыуҙырып торҙо. Шундай ваҡыттарҙа һөйөклөмдөң оло аҡылы, һиҙгерлеге, һәр яйһыҙ хәлдән сыға белеүе, нисек кенә ауыр булмаһын, тыныслыҡ һаҡлай алыуы һәм бер ваҡытта ла бар яуаплылыҡты минең өҫтөмә ауҙармауы, ниндәй генә хәл булмаһын, ярҙам итергә әҙерлеге ҡотҡарып ҡалғандыр беҙҙең ғаиләне тарҡалыуҙан. Сөнки беҙҙе ҡурсып, яҡлап, һаҡлап, хаталарыбыҙҙы төҙәтеп, ярҙам итеп торор өлкәндәребеҙ юҡ ине. Хәләлемдең әсәһе был донъянан киткәйне инде ул ваҡытта. Ә минең атай-әсәйем башҡа районда йәшәйҙәр. Яңы 22 йәше тулған беҙ икәү һәм мәктәптә уҡып йөрөгән ике ҡәйнешем генә ине йәнәшәбеҙҙә. Беҙҙең өҫтөбөҙҙә оло яуаплылыҡ - шул ике малайҙы ҡарау, бағыу, уҡытыу, кеше итеү. Уларға бөтә яҡлап терәк булыу.

Ундырып икмәк бешереп өйрәнгән йылды булды был хәл. Ҡомалаҡтан үҙем эшләгән сүпрә менән әсетеп, оло бер аяҡ ҡамыр баҫам. Ҡалҡыуы етеп, ҡамырым әҙер булғас, мейескә яғып ебәреп, икмәкте матур итеп бешереп алырға ғына ҡала. Эй, күпереп бешкән эҫе икмәкте мейестән сығарып, яңы айыртылған ҡаймаҡ йәки һары май, бал менән һөйөклөмә тәмле сәй эсереүе үҙе бер оло бәхет ине. Ә бөтә өйгә таралған яңы бешкән икмәк еҫе иҫ киткес кинәнес тыуҙыра торғайны. Ошолайтып һушыңды алырлыҡ тәмле, ундырып икмәк бешереп өйрәнгәнсе, күп кенә көс, сыҙамлыҡ кәрәк булды миңә.

Тыуып үҫкән йортто ҡалдырып, атай-әсәйҙән, ҡартәсәй-өләсәйҙәрҙән һәм башҡа туғандарҙан айырылып, 16 йәштә генә ауылдан сығып киткән мин ҡайҙан ғына икмәк бешерә беләйем инде. Кейәүгә сығып, ауылда йәшәрмен тип, ике ятып бер төшөмә кермәй торғайны бит инде. Әхирәтем, ауылда йәшәйәсәкбеҙ, тип сигеү сигергә, бәйләм бәйләргә өйрәнергә тотондо. Ә мин, ҡалала йәшәйем ғүмер буйы, бөтә нәмәне лә һатып алам, тип, туп тибәм, футбол, волейбол, баскетбол уйнайым, бассейндан сыҡмайым. Эштән арынып, аҙ ғына ваҡыт булһа, ҡала паркында йүгерәм, асыҡ һауала күнегеүҙәр эшләйем, тирҙа винтовканан сәпкә атам, лекцияларға йөрөйөм.

Бөтөнләй киреһенсә килеп сыҡты: кейәүгә сыҡҡас, әхирәтем ҡалала йәшәп ҡалды, ә мин һөйөклөмдөң ауылына йәшәргә күсеп килдем. Барыһына ла өйрәнергә тура килде: сигергә, бәйләргә, бешеренергә, аҡты (һөттө) эш итергә һәм башҡа тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫлек ауыл йорт - ҡураһындағы эштәргә өйрәнеп алырға тура килде.

Икмәк бешерергә өйрәнеү тураһында ине бит әле һүҙем. Үҙем икмәк һала белмәгәс, күрше инәйҙәрҙән өйрәнеп, яҙып алып бешерәм икмәкте. Бөтәһен дә дөрөҫ эшләйем кеүек, инәйҙәр өйрәткәнсә еренә еткереп үтәйем. Ләкин икмәгем күбеп бешер урынға, сөсө икмәк һымаҡ ялпашып килә лә сыға мейестән. Икмәк һалған һайын көнөм илап тамамлана. Ә был инде ҙур трагедия минең өсөн, йәнәһе, мин эшләгән эш һәр ваҡыт иң яҡшыһы, иң уңғаны булырға тейеш. "Эшләһәң, еренә еткереп эшлә, ҡулыңдан килмәй икән, бөтөнләй тотонма!"- минең ғүмерем буйына девизым ошо. Әгәр ҙә эште ҙур теләк менән, күңелемде һалып башҡарам икән, уны еренә еткермәйенсә туҡтала алмайым. Ә инде нимәнелер эшләргә теләгем юҡ икән, мине бульдозер ҙа урынымдан ҡуҙғата алмаясаҡ. Шуға ла һалған икмәгемдең уңмауы ҙур проблема ине ул саҡта.

Бер көндө ҡәйнешемдең өлкәнерәге: "Еңгәй, икмәк әсетеп һалһаң, миңә әйт әле, ниндәй хата эшләйһең икән, ҡарайыҡ",- тине. Икмәк һалырға йыйынған көндә ҡәйнешемдең өйҙә булыуын һорайым. Ул ҡамыр әсетергә ҡуйғандан алып, минең ниндәй эштәр башҡарғанымды байҡап йөрөнө. Мейескә яғып ебәргәс, әле яртылаш ҡына янған мейескә ҡарап, ҡәйнешем: "Еңгәй, ҡамырыңды табаға эшләп ултыртырға ваҡыт", - тине."Иртә бит әле, мейес ҡуҙланып өлгөрмәгән", - тип яуаплайым. "Ҡуҙланғас һуң була, ҡамыр ҡалҡып өлгөрмәй, шуға күрә икмәгең сөсө икмәк һымаҡ була", - ти ҡәйнешем.

Был юлы бешереп алған икмәгем шул тиклем күбеп, йомшаҡ, хуш еҫле булды. Ә мин ҡыуанысымдан ҡәйнешемде ҡосаҡлап, үбеп-үбеп рәхмәттәр уҡыным, бәхетемдән бейеп-бейеп алдым. Һөйөклөмдөң эштән ҡайтҡанын көтөп, саҡ кис еткерҙем. Ул ҡапҡанан ишек алдына ингәндә, мин икмәктәремде тотоп, уны ҡаршылап, өй тупһаһында бейеп тора инем. Икмәгемдең шул тиклем матур булып уңып бешкәнен, уны ҡәйнешем ярҙамында эшләгәнемде, ниндәй бәхетле икәнемде бер тынала һөйләп бирҙем. Ҙур түңәрәк икмәкте шул көйө тешләтеп, ауыҙ иттерәм ғәзиземә, үҙемде лә онотмайым. Ә һөйөклөм, мине икмәктәрем менән ҡуша күтәреп, көлә-көлә ишек алды буйлап өйрөлдөрә, ул минән дә бәхетлерәк, минән дә шат. Ошонан һуң һәр икмәк һалыуым шатлыҡ, ҡыуанысҡа, байрамға әйләнде минең өсөн...

Бер көндө өйҙә беҙ икәү генә ҡалдыҡ, ҡәйнештәрем күрше ауылға киткәйне. Мин ҡамыр ҡуйғанмын, һөйөклөм ишек алдында мотоциклын йүнәтә, мөкиббән китеп соҡой, техника тиһәң, иҫе китә торғайны. Ҡамыр бер нисә тапҡыр ҡалҡып сыҡты, мин мейес тоҡандырырға итһәм, ярып әҙерләнгән утын бөткән булып сыҡты. "Утын ярып бир әле тиҙ генә, зинһар! "- тип үтенәм ғәзиземә. "Хәҙер, хәҙер, бер минут!"- ти ул, үҙе һаман шул матайы менән мәж килә. Утын ярыу минең ҡулдан килмәне инде ғүмер буйы, өйрәнә алманым, оһолом юҡ. Үҙем иртәнсәктән ҡыҙып, янып барам, тиҙ генә дөрләп тоҡанырға ғына торам. Тәүге балама ауырлымын, әллә шуғамы? Утын яра белмәгәнемәме? Һөйөклөм үҙенең эше менән булышып, мине ишетмәгәнгәме? Белмәйем, ниндәй сәбәптәндер енем сығырға әҙер тора. Бер нисә тапҡыр өндәшәм, һөҙөмтә шул уҡ. Иң ахыры эсемдәге ҡоторонған енем сығып китә. Мин: "Нишләп шул утын ярып бирергә лә ҡаңҡылдатаһың кешене? Матайың ҡасып китәме әллә? Бер аҙға айырылып торһаң, тимереңә бер нәмә лә булмаҫ ине әле. Ҡамырым ныҡ әсеп китә ләбаһа! Икмәк миңә генә кәрәкме ни ул? Һиңә кәрәкмәгәнде, мин нишләп көйәм әле?"- тип, шул енләнгән ҡыҙыулыҡ менән ҡамырымды елтерәтеп алып сығып, һарай янындағы ҡошҡорт һауытына ауҙарам да, дөбөр-шатыр өйгә инеп китәм. Ярһыуымды баҫа алмай, бер килке хитланам.

Мин ҡабаттан ишек алдына сыҡҡанда төйләгәндең ҡаҙ бәпкәһен типкәнен күреп ҡалам. Бар донъяға һөрән һалып, төйләгәнде баҫтыра башлайым. Таш, тупраҡ, таяҡ елләйем, яман тауыш менән ҡысҡырам, баҫтыра-баҫтыра төйләгәнде тетәм генә. Бәпкәнең ауырлығынан осоп китә һалырға өлгөрә алмаған бурҙың өҫтөнә ябырылам. Минең асыуым шул тиклем ҡурҡыныс булғандыр инде, төйләгән ҡото осоп, бәпкәне төшөрөп ҡалдыра. Ләкин муйыны һынған бәпкә үлгәйне инде, мин илай-илай уны ергә күмәм. Кире ишек алдына ҡайтып ингәс, тауыҡтарҙың ҡояш йылыһына тағы ла ныҒыраҡ ҡалҡып киткән ҡамырымды тапауын, суҡыуын күреп, мин инде үкереп илайым. Бирлелегемде тыя алмай, ниндәй вәхшилек эшләүемде аңлауым мине иҫ киткес хәсрәткә күмеп китә. Тауыҡтарҙы борҡолдатып ҡыуып ебәрәм дә, ҡамырлы һауыт эргәһендә сүгәләп, үҙемде әрләй-әрләй илайым. Был хатаны төҙәтеп булмағаны бигерәк тә аяныслы, йән әрнеткес үкенесле, әсенешле хәл булды минең өсөн.

Иплән кенә яуырынымдан ҡосаҡлап, күкрәгенә ҡыҫып, һөйөклөм мине тынысландырырға тырыша:

- И-и-ии, яһилым, бирлем минең! Ғәфү ит, ғәфү ит мине, йәнем! Зинһар, илама! Тынæслан, үҙеңдең дә, бәпәйҙең дә һаулығына зыян булыр. Ул тиклем көйөнөрлөк бер нимә лә юҡ бит. Зинһар, тыныслан! Бары ла яҡшы бит, хафаланма!

- Бер нәмә лә юҡ тиһең! Ә ҡамырымды күрмәйһеңме? Мин тауыҡ суҡып, тапап бысратһын өсөн икмәккә ҡамыр әҙерләгәнменме ни? Етмәһә, анау төйләгәне бәпкәләремде урлай! - тип ҡаршылашам.

- Ҡамырҙы беҙ башҡа тапатмайбыҙ, йыйып алып, мейестә көлсәләр (көлгә күмеп бешерелгән өшә) бешереп, һарыҡкәзә, башмаҡтарға ашатырбыҙ, - ул һөйләп кенә ҡалмай, ҡамырҙы йыйып алып, утъяҡҡысҡа алып инеп тә китә. Мейескә лә яғып ебәрергә өлгөргән икән. -Бөтәһе лә һәйбәт булыр! Тик һин генә илама, йәнем! Зинһар, көйәләнмә! Йә, йылмай әле, йылмай! Ә төйләгәнгә килгәндә, һин уның шул тиклем ҡотон осорҙоң, ул башҡа беҙҙең ишек алдына яҡын да юлламаясаҡ, алыҫтан урап осоп үтәсәк. Туғандарына ла һөйләйәсәк, Зилдәнең бәпкәләренә теймәгеҙ, кем тыңламай, уға үлем янай, тип. Шуның өсөн төйләгәнде онот та, бер генә йылмай әле, йәнем! - иркәләп, һөйөп, барыбер тынысландырып, йылмайтып ҡуя мине ғәзизем. Бер аҙҙан мин дә унан миңә үпкәләмәүен үтенәм. Алйотлоғом, сабырһыҙлығым менән ҡылған хатам өсөн ғәфү үтенәм. Башҡа бер ҡасан да, нисек кенә бирләнһәм дә, ризыҡтарҙы сығарып елләмәҫкә һүҙ бирәм. Һәм мин ғүмерем буйы ул һүҙемде тотасаҡмын.

Ошо көндән алып мин бер ваҡытта ла утын тип йонсомаясаҡмын.

Утын һәр саҡ ярылған, өй тупһаһына ташып өйөп ҡуйылған буласаҡ. Айырым ҡумтала ҡоро тап, туҙ тултырылған, һәм гел генә шулай буласаҡ. Ашнаҡ, мунса соландарында ла ҡоро утын ярып өйөлгән, эргәһендә ҡумтала тап, туҙ торасаҡ. Һөйөклөм дә, ҡәйнештәрем дә миңә башҡаса утын тип иларға юл ҡуймаясаҡ. Ә мин уларҙы һәр ваҡыт хуш еҫле, тәмле, күпереп бешкән икмәктәр менән һыйлаясаҡмын.

Ә шулай ҙа 13-14 йылдар үтеп киткәс, мин тағы бер шундайыраҡ эш ҡылып ҡуясаҡмын. Был инде бөтөнләй икенсе сәбәптәргә, икенсе хәл-ваҡиғаларға бәйле буласаҡ. Күңелем килһә, һөйләрмен әле бер саҡ.

**Зилдә ХӘМИҘУЛЛИНА.**

✓ *Ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайнатып, һыуыҡта, ҡырыҫ тәбиғәт ҡосағында, "Урал батыр" эпосы яңғырауы аҫтында ғәмле-сәмле ярыш ойоштороорға йөрьәт итеүҙәре менән хайран итте Башҡорт дәүләт ҡурсаулығы хеҙмәткәрҙәре.*



*АФАРИН!*

# УРАЛ БАТЫРҘЫҢ...

## ҡышҡы уйындары

**(Башы 1-се биттә).**

...Башһырт шарьяжы янында уҡ тарихи ерҙәргә аяҡ баҫыуыңды тояһың: Әл-Бируни һәм Мәхмүд Гардизиҙар IX быуатта сәйәхәттә булып, нәҡ ошо урындарҙы етенсе климаттың сиге тип билдәләп китә. Башҡорт рухы аңҡып торған ҡурсаулыҡ ҡунаҡханаһы: башҡорт өйө, ҡойма аласыҡ, түбәлек, бишбармаҡ... Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән йыйылғандар һәм район мәктәптәренең уҡыусылары өсөн үткәрелгән йәйге экологик лагерҙар; республика күләмендә беҙҙең мәктәп менән уртаҡ үткән проекттар: "Рух шишмәһе башы - Тереһыу", "Тел һағында күмәкләп", "Тел асҡысы - ил асҡысы", "Йәшел ҡалҡан"; төрлө өлкәләрҙән, ҡалаларҙан йыйылған балалар өсөн "Урал батыр" эпосын һәм үҙебеҙҙең "Бабсаҡ һәм Күсәк" легендаһын рус телендә тыңлатыу һәм сәхнәләштереү, улар буйынса үткәрелгән түңәрәк өҫтәлдәр... Был исемлекте бик оҙаҡ дауам итергә булыр ине.

Йәйге һабантуйҙы кем дә үткәрә ул! Ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайнатып, 30 градуслыҡ һыуыҡта, ҡырыҫ тәбиғәт ҡосағында, "Урал батыр" эпосы яңғырауы аҫтында ғәмле-сәмле ярыш ойоштороорға йөрьәт итеүҙәре менән хайран итте Башҡорт дәүләт ҡурсаулығы хеҙмәткәрҙәре. Ниндәй эште лә фекерҙәштәр менән атҡарып сығыу күпкә еңелдер: Иҫке Собханғол ауыл хужалығы колледжы, "Мәргән уҡсы" хәрби-патриотик клубы, Баймаҡ районы "Ылаҡ" клубы ағзалары күтәрмәләште сараны. Былдай сараның әһәмиәтен аңлағандарға афарин, тиергә генә ҡала. Ә уны ойоштороуҙың башында Башҡорт дәүләт ҡурсаулығы директоры, биология фәндәре кандидаты Вәсилә Яныбаева һәм уның коллективы тора. "Урал батыр" эпосында үҫеп килеүсе йәш быуынға еткерер тәрән фәлсәфә һалынған. Улар аңында оноколған рухи ҡиммәттәрҙе тергеҙеү мөһим. Маҡсаты шул был сараның..." - ти Вәсилә Әхәт ҡыҙы. Уның экологик-ағартыу эше буйынса директор урынбаҫары, биология фәндәре кандидаты М. Нәбиуллин шулай тип өҫтәй: "Ҡурсаулык биләмәһендә урынлашҡан тауҙарҙың йәше 500 млн йыллап билдәләнә. Әгәр Урал батырҙың эпосы бер нисә мең йыл тип иҫәпләнһә, беҙ "ул күренеш беҙҙә булған" тип ышаныслы итеп әйтә алабыҙ. Ҡурсаулыҡ биләмәһендә эпоста әйтелгән күп кенә тауҙарҙың атамалары бар. Мәҫәлән, Ҡараташ, Дейеү тауҙары. Икенсе юҫыҡтан ҡараһаң, хәҙер тәбиғәт ныҡ үҙгәреш кисергән, ағастар ҡырҡылып бөткән, йылғалар һайыҡҡан, ә ҡурсаулыҡ биләмәһе кеше ҡулынан ныҡ үҙгәрештәр кисермәгән. Килгән ҡунаҡтар байрам рухын ғына түгел, тәбиғәт ҡөҙрәтен тойоп, уға һоҡланып ҡайтһын, тигән маҡсат та ҡуйҙыҡ был байрамды ойоштороп алдынан..."

Байрам филология фәндәре докторы Розалия Солтәнгәрәеваның алғыш һүҙҙәре менән башланып китте. 2016 йылда Ҡырғыҙстанда үткән күсмә халыҡтар фестивалендә IV урын яулауcы Баймаҡ биатлон клубы ағзалары төрки халыҡтар араһында ҡабаттан тергеҙелә башлаған "Ылаҡ" күрһәтмә сығышы менән "Аh!" иттерҙе барыһын да. Ярыш аттары икәне әллә ҡайҙан күренеп тора! Ҡолаҡтарын ҡайсылап, фарман көтөп, бейеп торалар. Әйткәндәй, тамашаны ҡарай башлағас та, бер аҙ ҡырағайыраҡ тойолған уйындан тәндәр ҡорошоп киткәндәй булғайны. Ысынында, тартышта эсенә бесән тултырылған һарыҡ тиреһе ҡулланыуҙары зауыҡлы итте. Ат ярышы һөҙөмтәләре шулай булды: Яҡупов Марат (Ҡолғана), Шәрипов Ғәҙел (Яуымбай), Фәхретдинов Кәрим (Һарғая) һәм Килдейәров Илфат (Ҡолғана).

*Егет, уйың уй булһын,*
*Бер ҙур майҙан ҡорайым,*
*Батырлығың һынайым,*
*Шунда даның күрәйем.*

Келәмдең ап-ағында майҙан тотоп, бил һынашты батырҙар. Төрлө категорияла еңеүселәр шулар булды: Ғәбделхәйев Денис (Бөрйән), Фәхретдинов Айбулат (Һарғая), Вәлиев Илнар (Яңы Собханғол), Хәмитов Илдус (Һарғая), Вәлиев Ирәмән (Ҡолғана).

*Батырҙан күреп, уҡ юныһ,*
*Өлкәндән күреп, яу ҡыуып,*
*Ил эсендә үҫер ул,*
*Утын-һыуын кисер ул...*

Уғатар батырҙар ярышы олоһон-кеселһен генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙарҙы, балаларҙы ла йыйҙы. Был ярышта ҡатнашыусылар географияһы шаҡтай киң ине. Өс этаптан торған был ярышта: ир-егеттәрҙән - Хәйруллин Нуриман (Белорет), Ғәлиулин Юлай (Белорет), Мортазин Урал (Өфө); ҡатын-ҡыҙҙарҙан - Кәримова Лира (Ишембай), Кинйәбаева Зөһрә (Ишембай), Остапчук Оксана (Өфө); балаларҙан - Боҫҡонов Батырша (Бөрйән), Рәхимов Илнар (Бөрйән), Кәримова Карина (Ишембай) еңеүселәр тип тәбрикләнде.

*Етмеш батман ауырлыҡ*
*Күтәреп күккә сөймәгән,*
*Өс бармағы осонда*
*Төшөрмәйсә тотмаған*
*Кеше - батыр ир булмаҫ...*

"Суҡмар ырғытыу". Сей ҡайын оропһонан яһалып, 23 килограмм тартҡан был ҡорал янына ике тиҫтәгә яҡын ир-егет йыйылды. Иң таҫыллыһы - Хәйруллин Нуриман суҡмарҙы 4 метр 20 см алыҫлыҡҡа ырғытты. Шулай уҡ "Килен-ҡәйнә арҡан тартышы" исемле 4 команданан торған ярыш үҙенсәлекле булыуы менән айырылып торҙо. Һабантуйҙарҙағы кеүек, "Көршәк ватыу" , "Арҡан тартыш"та ла һәр кем үҙ көсөн һынап ҡараны.

Бөтә илде йыйнаған, алҡындырып һыйлаған ҡурсаулыҡ хеҙмәткәрҙәренә "Афарин!" тиергә ҡала! Хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре үтәлеше, ярыш майҙаны әҙерләү (ҡыш көнө!), ҡаршы алыу-оҙатыу - бик ентекле әҙерлек һәм юғары кимәл! Тош-тош урындарҙа яғылған усаҡтар, боҫрап бешкән бишбармаҡ, геүләп торған сауҙа! Күмәк көс һөҙөмтәһе был.

Ҡышҡы һабантуймы? Юҡ! Һабан миҙгеле яҙ ғына башлана. Урал батырҙың ҡышҡы уйындары. Этнотуризмды үҫтереүҙең бер тармағы. Һәм иҫ киткес тәьҫораттар, тойғолар! Ҡурсаулыҡ биләмәһе:

*Ил һөйөргә ил булып,*
*Ер һөйөргә бағ булып,*
*Дошман күҙен ҡыҙҙырып,*
*Балҡып торор ер булһын!* - тип теләге килә.

Ә шулай ҙа киләсәктә ут яғып, усаҡ тирәләй өйөрөлөп йөрөүҙәр булмаҫтыр, тип ышанғы килә. Уныһы беҙҙең халыҡҡа хас түгел. Дөрөҫ булмаған ғәмәлгә эйәреүселәр күп булыр тип хафаланам. Былай ҙа фольклорға мәжүсилек элементтары тағырға тороусылар табылыр. Быныһы - юлайҡан әйтеүем. Бер һүҙ менән әйткәндә, шәп, бик шәп булды байрам.

**Миңнур ҠАСИМОВА.**
**Бөрйән районы.**









*Зиннур БОҪҠОНОВ фотолары.*

*ЯРҘАМ*



# ТУЙ ТАБЫНЫНДА...

## мәҡәлдәр, әйтемдәр

- Килен ҡәйнә тупрағынан.
- Улы барҙың - ҡулы бар,
  Ҡыҙы барҙың - наҙы бар.
- Улы барҙың урыны бар,
  Ҡыҙы барҙың ҡәҙере бар.
- Улың етһә, ҡыҙы яҡшы менән таныш бул,
  Ҡыҙың етһә - улы яҡшы менән таныш бул.
- Ут усаҡта яҡшы, ҡатын (ҡыҙ) ҡосаҡта яҡшы.
- Уңған ҡатын - ир күрке,
  Матур ҡатын - ил күрке.
- Уңған ҡатын ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайнатыр.
- Уңған ҡатын ул табыр, изге ҡатын ҡыҙ табыр.
- Һөйгән һөйгәненә бара, һөйгән һөйгәнен ала.
- Һыу һыйған ярында, егет һөйгән янында.
- Эҙләмә матурҙы, эҙлә күңелгә ятырҙы.
- Эҙләмә матурҙы, эҙлә эргәңдә ятырҙы (ҡәберҙәге яҙыу ).
- Эйәләштереү - илсенән,
  Ялыҡтырыу - ялсынан.
- Яҡшы атҡа ҡамсы кәрәкмәй,
  Уңған ҡыҙға яусы кәрәкмәй.
- Яҡшы ир - ил күрке,
  Яҡшы ҡатын - ир күрке.
- Яҡшыны эҙләп ал, насары үҙе лә килер.
- Яман атҡа менгәнсе, йәйәү йөрө талғансы,
  Яман ҡатын алғансы, буйҙаҡ йөрө ҡанғансы.
- Ят кешегә сер сисмә,
  Ят ҡулынан һыу эсмә.
- Ятҡан аяҡ ял табыр,
  Йөрөгән аяҡ мал табыр.
- Алғы итәгенде бала баҫһын,
  Арт итәгенде мал баҫһын.
- Ашына күрә табағы, балына күрә ҡалағы.
- Бал бирәйем үҙеңә,
  Балҡып сыҡһын йөҙөңә!
- Беҙ өйләнгәс, төн ҡыҫҡарҙы.
- Ике ҡанат - бер ҡойроҡ.
- Ике һыңар - бер пар.
- Икәү булып ятығыҙ,
  Өсәү булып тороғоҙ!
- Итәгемме, еңемме, ошо минең тиңемме?
- "Кейәү-кейәү" тиә, елкә ергә тейә.
- Киткән ерендән килгән ерең яҡшы булһын.
- Көндөҙ йөрөһәң, кеше күрә,
  Төндә йөрөһәң, эт өрә.
- Күк төймәкәй кемдәлер, күңелкәйем шундалыр.

**Фәнүр ШАҺИЕВ әҙерләне.**
**(Аҙағы).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТАҒЫ ЛА...
## шәкәр тураһында

■ Шәкәрҙе даими ашау бил үлсәмен ҙурайтып ҡына ҡалмай, ҡан әйләнешенә зарар килтереүе ихтимал. Һөҙөмтәлә, эске ағзалар эшмәкәрлеге зыян күрә. Ғалимдар 2 аҙна дауамында көнөнә 225 грамм шәкәр ашаған ир-егеттәрҙә күҙәткән. Эксперимент башланған һәм тамамланған мәлдә ир-егеттәрҙең аяҡ ҡан әйләнеше күрһәткесен баһалаған. Бәктиһәң, шәкәрҙе күп ашаусыларҙа ҡан әйләнеше 17 процентҡа насарая икән. Бынан, тәү сиратта, йөрәк һәм мейе зыян күрә. Ғалимдар билдәләүенсә, кеше дөрөҫ туҡлана икән, ҡайһы берҙә татлы эсемлектәр эсеү һәм тәм-том ашау уның сәләмәтлеген ҡаҡшата алмай. Әйткәндәй, шәкәр яман шеш күҙәнәктәрен уята һәм шештәрҙе агрессивҡа әйләндерә. Яман шеш күҙәнәктәре шәкәрҙе тарҡата һәм лактата матдәһен барлыҡҡа килтерә, был шеште үҫтерә. Сәләмәт күҙәнәктәргә ҡарағанда, зарарланған күҙәнәктәр шәкәрҙе күберәк тарҡата. Фән был метаболик аномалияны Варбург тәьҫире тип атай. Яман шеш күҙәнәктәренең шәкәрҙе күпләп "ашауы" шеште аҙҙыра һәм даими туҡландыра. Быны раҫлау өсөн белгестәр бәшмәктәрҙә һынауҙар үткәрә. Бәшмәк күҙәнәктәрендә яман шештәге кеүек үк аҡһымдар бар, бары тик улар мутация һөҙөмтәһендә формаһын үҙгәрткән. Етмәһә, бәшмәктәр ҙә шәкәр ярата.

■ Күптәр уйлауынса, ҡышын спиртлы эсемлектәр кешене йылыта, ә һалҡын һауа вирустарҙы юҡҡа сығара, шунлыҡтан көн һалҡын торғанда киҙеү таралмай. Табиптар быларҙың барыһы ла уйҙырма икәнлеген белдерә. Йылыныу өсөн спиртлы эсемлек эсеү иң яҡшы ысул түгел, ә вирустар ҡышын да әүҙем тарала. Ҡыш өшөмәҫ өсөн тәбиғи туҡымаларҙан тегелгән кейемгә өҫтөнлөк бирергә кәрәк, тип иҫкәртә белгестәр. Тирләү - түбән температурала хәүеф тыуҙыра, сөнки организмды тағы ла нығырак һыуыта. Шуға ла кейем һауаны яҡшы үткәрергә тейеш. Ҡаты һыуыҡтарҙа урамда оҙаҡ йөрөмәгеҙ, 30-40 минут та етә. Ҡыш юғары энергияға эйә ризыҡтар - аҡһымға, углеводҡа бай ризыҡ ашағыҙ. Ҡылдар, аяҡтар, бит, баш, ҡолаҡтар һәм танауҙы өшөтөүҙән һаҡларға. Өшөгәнһегеҙ икән, башта йылы һыу эсегеҙ. Организмды эстән йылытыу мөһим. Шунан һуң ғына йылы һыу менән йыуынырға, өшөгән тирене ҡоротҡансы һөртөргә. Тире ағарып, өшөүҙең билдәләре күренә башлаһа, табипҡа мөрәжәғәт итергә. Өшөү тын юлдарына ла зарар килтерә. Һыуыҡ һауа менән тын алыу бронхит, үпкәләр шешеүенә, ауыр вируслы-бактериаль ауырыуҙар үсешенә килтерә ала. Һалҡын һауа вирустарҙы юҡҡа сығармай, бары тик һыуыҡтарҙа кеше магазиндарға, башҡа йәмәғәт урындарына һирәгерәк сыға. Кешенән кешегә вирус йоғоу ихтималлығы кәмей.

■ Medisys компанияһы хеҙмәткәрҙәре билдәләүенсә, даими рәүештә йоҡо туймау организм өсөн эскелек килтергән зыянға тиң. 6 сәғәттән кәм йоҡлау һимереүгә, депрессияға, инфаркт һәм инсультҡа килтереүе ихтимал. Аҙ йоҡлау һөҙөмтәһендә иғтибар кәмей, кеше ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итә алмай башлай. Шуға ла бындай ваҡытта автомобиль йөрөтөү ҙә хәүефле. Был иҫерек көйөнә рулгә ултырыу менән бер. Белгестәр раҫлауынса, йоҡо грелин, кортизол, лептин гормондары күләмен нормала тотоуға булышлыҡ итә. Һанап кителгән гормондарҙың аппетит менән бәйле булыуын беләбеҙ. Тимәк, йоҡо туймаһа, аппетит күтәрелә, кеше күберәк ашай башлай һәм артыҡ ауырлыҡ йыя. Тағы бер тикшеренеү күрһәтеүенсә, йоҡо етмәһә мейе үҙ-үҙен "ашай" башлай. Уның һөҙөмтәһендә Альцгеймер ауырыуы һәм башҡа неврологик тайпылыштар барлыҡҡа килеүе бар.

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# СИТТӘР БАҺАЛАЙ ҘА УЛ,
## үҙбаһабыҙ аҡһап китә шул

**Гәзиттең былтырғы 49-сы һанында сыҡҡан "Алтынсы интеграл һәм... ҡурай, ҡымыҙ, башҡорт теле тураһында" әңгәмәне уҡығас тыуған уй-фекерҙәремде еткерергә булдым. Ҡурай, ҡымыҙ, башҡорт теле... Был һүҙҙәр үҙҙәре үк мәҡәләне мотлаҡ уҡырға саҡырып тора, әйтерһең дә, хәтерҙе уятырға тейешле код һалынған уларға.**

Һәр минуты ҡәҙерле булған Чернэ әфәндегә ваҡыт бүлгәне өсөн рәхмәт. "Башҡорт ҡымыҙы бөтөнләй икенсе төрлө... Ҡурайҙың кешегә йән өрөрлөк ҡөҙрәте бар... Һәр кем, милләтенә ҡарамайынса, башҡорттар кеүек тын ала... Мин дә бында саҡта үҙемде башҡорт тип иҫәпләйем" - Чернэ әфәндеңең бындай һүҙҙәре күңелгә май булып яғыла. Юл ыңғайы ҡабалан ғына әйтелһә лә, сәпкә тейгән.

Мәҡәләне уҡығас тыуған тәүге тәьҫораттарым шулай булды. Дуҫтарым менән фекер алышыу ҙа хистәремде арттырҙы, әммә... Был һөйләшеүгә ниҙер етмәй кеүек, ниҙер хафаландыра.

Хистәр бит ул алдан йөрөй, уйланыуҙар килә аҙаҡтан. Уйланыуҙарымдың осона сыға алмай, бергилке икеләнеп ыҙаланым, аҙаҡ икеләнеүемдең сәбәбенә төшөндөм - Олег Черэнның "мин дини кеше түгел", тигән һүҙҙәре айныҡтандай булды. Дини кеше, диндар кеше тамырҙаш һүҙҙәр түгел, бер мәғәнәне аңлатҡан һүҙҙәр. Диндар урыҫсаға тәржемә иткәндә "богобоязненный" тигәнде аңлата, йәғни Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡҡан кеше. "Мин дини кеше түгел", тип әйтеү батырлыҡ микән? Юҡ, минеңсә, Хаҡ Тәғәләне ҡабул итеүҙән ҡурҡыу ул. Иҫләйһегеҙҙер, олатай-өләсәйҙәр, өләсәйҙәр бигерәк тә, беҙҙе нисек тәрбиәләне? "Ауыҙың ҡыйшайыр, Алла бабай башыңа һуғыр", тип ҡурҡытҡандары хәтерегеҙҙәлер...

Күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ: минең өйөм бөхтә, унда һәр нәмә үҙ урынында, һауаһы ла саф - ҡәнәғәтмен. Мин шул мөхиттә үҙемсә тын алып өйрәнгәнмен, әйтмәһәләр, ул турала уйлап та бирмәҫ инем. Шаңҡытыуҙар, шаҡ ҡатырыуҙар, уҙғынсыларҙың үҙҙәре кеүек, килә-китә, беҙ ҡалабыҙ. Ошо ерҙә мөфтөй Тәлгәт Тажетдиндың Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында сығыш яһағанда әйткән һүҙҙәре иҫкә төшә. "922 йылда Ислам динен дәүләт дине итеп ҡабул иткән ваҡытта Ибн Фаҙландың яҙмаларында башҡорт тигән милләт бар, татар тигән милләт яҙылмаған", - тигәйне ул. Ошо урында делегаттар ҡул саптылар ҙа, мөфтөй һүҙҙәренең аҙағына артыҡ иғтибар итмәнәләр шикелле. Был һүҙҙәрҙе цитата рәүешендә килтерәм: "Һеҙҙең шикелле, гәзиз ҡәрҙәштәребеҙ, иманын да, динен дә, кирелеген дә дауам иткән халыҡ юҡтыр бөтөн донъяла. Әле лә башҡорт башҡорт ул!" Былары дини кешенең һүҙҙәре.

Әлбиттә, беҙ башҡаса тын алабыҙ. Халыҡ ижады аша, йолаларыбыҙ аша, динебеҙ аша тын алабыҙ. Күңелебеҙҙә ошо ныҡлы, ышаныслы хазина бар икән, шаҡ ҡатырғыс һығымталарға мохтаж да түгелбеҙ, иншаллаһ. Хәйер, үҙебеҙҙең ошо хазинаға эйә икәнебеҙҙе иҫкә төшөрөп тороу, баһаларға өйрәнеү өсөн... ситтәрҙең шуға төртөп күрһәтеүе, аңғартыуы ла кәрәк шул инде...

Һүҙем аҙағында бер кинәйә һөйләйем әле, бәлки, ул беҙҙең һөйләшеүгә бер аҙ асыҡлыҡ индерер.

Туҡһан туғыҙ йортло ҙур ғына ауылда бик бәхетле кешеләр йәшәгән. Берөһөнән-береһе матурыраҡ, зауыҡ менән биҙәлгән өйҙәрҙә йәшәгән улар. Һәр хужалыкты гүзәл баҡсалар уратып алған. Ауылдаштар йыл әйләнәһенә емеш-еләктән, йәшелсәнән өҙөлмәгән. Яҙҙарҙы дәртләнеп ҡаршы алғандар, йәйҙәрҙе көндәлек хеҙмәт менән күңелле үткәргәндәр. Байрамдарҙа уйнап-көләп, йырлап-бейеп күңел асҡандар. Көҙ мул уңыш йыйғандар ҙа, ҡышҡыһын рәхәтләнеп ял иткәндәр. Ерҙә йәшәһәләр ҙә, күккә бағып, йондоҙҙарға ҡарап өмөтләнгәндәр, йәшәйеш тураһында уйланғандар, киләсәккә ышаныс менән ҡарағандар, кейеҙ-келәмдәргә йыһан есемдәрен биҙәк итеп төшөргәндәр.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ҺАРЫ МАЙ СЕРҘӘРЕ



**Борон-борондан халҡыбыҙ һары май эшләгән һәм ҡулланған. Быны ҡайһы берәүҙәр элекке ваҡыттарҙа аҡ майҙы һаҡлау өсөн һыуытҡыс булмауы, ә һары майҙың ҡар баҙында ла яҡшы һаҡланыуы менән аңлатһа ла, ата-олатайҙарыбыҙ уның сәләмәтлек өсөн файҙалы булыуын да белгән, күрһәң. Бөгөн һары майҙың организмға йоғонтоһон ҡарайыҡ.**

### Тәнгә йоғонтоһо

Аҙыҡты эшкәртеүҙе яҡшырта, токсиндарҙы сығарырға (бигерәк тә тәмләткестәр менән ҡулланылһа) ярҙам итә. Күҙәнәктәрҙе ирекле радикалдарҙан һаҡлай. Еңел үҙләштерелеүсе майлы кислоталар сығанағы булып һанала (һары майҙың майлы кислоталары ҡыҫҡа химик сылбырға эйә, шул уҡ ваҡытта оҙон химик сылбырлы майлы кислоталар ауыр үҙләштерелә һәм яман шешкә килтерә, ҡанды ҡуйырта). Сәләмәт аппетитты аса ("аҙыҡты эшкәртеү утын тоҡандыра"). Башҡа майҙарҙан айырмалы, ҡандағы холестерин кимәлен күтәрмәй. Күҙәнәктәрҙең регенерацияһына йоғонто яһауы һөҙөмтәһендә организмға йәшәрергә ярҙам итә.

Матдәләрҙең туҡыма алмашыныуын әүҙемләштерә. Атеросклерозды һәм ДНК-ның зарарланыуын (картайыуҙың бер сәбәбе) булдырмаҫҡа ярҙам иткән антиоксиданттарға эйә. Йылытыу һөҙөмтәһен бирә, шуға күрә организмда йылылыҡ етмәгәндә ҡулланыла. Шулай уҡ уның составында А һәм Е витаминдары, туҡымаларҙың үҫеүен һәм үҫешеүен тәьмин иткән линол кислотаһы (бигерәк тә үҫеүсе организм өсөн кәрәк) бар. Иммун һәм нервылар системаһын нығыта (һары май ҡулланып яһалған массаж тәнде йылыта һәм йомшарта).

### Һары майҙың аңға йоғонтоһо

Иғтибарҙы туплау һәләтен арттыра, был медитация һәр организмды көсөргәнештән арындырыу, йомшартыу өсөн бик мөһим.

Аң тынысһыҙлығынан, хафаланыуҙан арындыра (һары майҙы "мейе ризығы" ла тиҙәр).

Һары майлы етеле шәм кинлекте таҙарта - ҡояш яғына ҡараған бүлмәләге кеүек һөҙөмтәгә эйә булырһығыҙ.

### Һары май дауалай

Эс ҡатыуынан, анемиянан, оҙайлы йүтәлдән, күҙҙәрҙең ҡыҙарыуынан, тире ҡоро булыу сәбәпле барлыҡҡа килгән тире ауырыуҙарынан ярҙам итә. Оҙаҡ ваҡыт һаҡланған (бер йыл һәм унан да артығыраҡ) һары майҙың дауалау һәләте тағы ла арта. Ун йыл һаҡланған май иҫтән яҙыу һәм эпилепсияны, төрлө ағыуланыуҙарҙы, баш ауырыуҙарын (шул иҫәптән ҡолаҡ һәм күҙ сирҙәрен), ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарын дауалай, яраларҙы тиҙ бөтәштерә. Майҙы төрлө тәмләткестәр, үләндәр ҡушып та, үҙен генә лә ҡулланырға мөмкин. Бының өсөн майҙы ауыртҡан ергә һөртөргә һәм ыуырға кәрәк. 100 йыл һаҡланған һары май бөтөн ауырыуҙарға ла дауа! Хәйер, был ваҡытҡаса ул таш кеүек ҡата һәм уны оҙаҡ, ҡайһы бер ваҡыт хатта тәүлектәр буйы ҡайнатырға кәрәк. Быны ни өсөн Һиндостанда һары май ҡулланыуҙы быуындан-быуынға тапшырыу йолаһы йәшәп килә икән, сөнки унда шул рәүешле тупланған көс баһаһыҙ!



Өс йылға бер тапҡыр июль айында ауыл кешеләре йәшәгән урындарынан йыраҡ булмаған яланда ҡорға йыйыла торған булғандар. Өс йылға бер тапҡыр кешеләр Аллаһы Тәғәлә тауышын ишеткән һәм үҙ һорауҙарына яуап алған. Маңлай күҙҙәре менән күрмәһәләр ҙә, күңелдәре менән кешеләр эргәләренә килгән Хоҙайҙы тойғандар. Һәр кем ошо мәлдә киләсәккә уй-хыялдар ҡорған, Хаҡ Тәғәлә менән кәңәшләшкән. Мөғәмәлә төрлө кимәлдә барған: берәүҙәр тәрән уй-фекергә сумған, икенселәр ябай ғына донъяуи кимәлдә аралашҡан, өсөнсөләрҙең мөғәмәләһе уйын-көлкөгә ҡоролған.

Мәҫәлән, берәү ошондай һорау биргән:

- Хоҙайым, ниңә һин бөгөн беҙҙе ямғыр һыуына ҡойондорҙоң? Иртә менән лысма һыу иттең дә, төшкә ҡарай ғына ҡояш йылыһын өләштең. Әллә үҙең төшкә тиклем йоҡондан уянманыңмы, әллә беҙҙең байрам майҙанына йыйылғанды көтөп торҙоңмо?

- Юҡсы, - тип яуап бирә Хоҙай. - Мин иртә таңдан уҡ байрамығыҙ күңелле үтһен өсөн хәстәрлек күрҙем. Арағыҙҙа иртәнге тәһәрәт алырға йыбанғандар бар. Улар байрам йәмен ебәрмәһен, тинем дә, бөтәгеҙҙе лә бер юлы ҡойондорҙом. Әле бына таҙарынып кибендегеҙ.

- Улайһа, бик шәп иткәнһең, - тип ризалаша һорау биргән кеше.

Сәстәренә сал төшкән олпат ир бөтөнләй икенсе төрлө һорау бирә:

- Хоҙайым, әйт әле миңә, йыһандағы йондоҙҙарҙың мәңгелек тәртибе ни аңлата? Ерҙәге тормоштан биҙһәм, үҙем һайлаған йондоҙға ғаиләм менән күсенеп бара аламмы?

- Йондоҙҙар һеҙгә йыһан тураһында мәғлүмәт бирә. Ерҙәге ығы-зығынан арынып, күңел тыныслығына өлгәшә алһағыҙ, йондоҙло китап һеҙгә үҙ серҙәрен асыр. Әммә бының өсөн тән таҙалығы ғына етмәй, күңел сафлығы мөһим. Йыһан сикһеҙ - һайла, әйҙә, үҙеңә оҡшаған планетаны. Тик быың өсөн бер генә шартты үтәргә кәрәк: йондоҙҙағы ғүмереӊ, ерҙәге тормошоң менән сағыштырғанда, тик ижад менән генә һуғарылһын.

Шулай күңелле йәшәгән был ауыл халҡы.

Көндәрҙән бер көндө был ауылға бер ыңғайҙан йөҙ аҡыл эйәһе килгән. Киң күңелле ауылдаштар ят кешеләрҙе бик ҡунаҡсыл ҡаршы алған, һый-хөрмәт күрһәткән. Бындай муллыҡты күреп, хакимдарҙың иҫтәре киткән. Уларҙың береһе былай тип һүҙ башлаған: "О, кешеләр, һеҙ бик матур йәшәйһегеҙ. Әммә тормошоғоҙ үтә талғын, бер тигеҙ үтә. Һәр бер өйгә ҡот ҡунып, етеш йәшәһәгеҙ ҙә, Аллаһы Тәғәлә менән дөрөҫ һөйләшә белмәйһегеҙ, һеҙгә тәрбиәлелек етешмәй. Шуға күрә һеҙ Илаһи көскә дан йырлап табына белмәйһегеҙ".

"Юҡсы, бер ҙә улай түгел, - тип, ауылдаштар борсола башлаған. - Аллаһ менән беҙ өс йылға бер тапҡыр тиң күреп аралашабыҙ. Уны күрмәһәк тә, һәр иртәлә Ул беҙгә ҡояш булып балҡый, бал ҡорто булып бал йыя, ҡышҡы һалҡындарҙа ерҙе аҡ шәл менән ҡаплай. Ул һәр саҡ эргәбеҙҙә, беҙгә тәбиғәттең һәр миҙгеле ҡәҙерле".

"Юҡ, һеҙҙә эштәр дөрөҫ ойошторолмаған, - тигән аҡыл эйәләре. - Беҙ һеҙҙе Аллаһ менән аралашырға өйрәтергә килдек. Бөтә Ер шары буйлап ғибәҙәтханалар, матур-матур ҡорамдар төҙөлә. Был изге урындарҙа кешеләр Аллаһ менән көн дә һөйләшә ала. Беҙ һеҙҙе лә өйрәтәсәкбеҙ".

Өс йыл дауамында ауыл кешеләре аҡыл эйәләренең һүҙҙәрен диҡҡәт менән тыңлаған. Һәр хакимдың үҙенә хас ҡарашы, үҙ теләге булған: берәүҙәре ҡорамды нисегерәк эшләү тураһында фекер һатҡан, икенселәре ғибәҙәт ҡылыу тәртибе тураһында һөйләгән - һәр кем үҙ яғына ҡайырған. Ауылдаштарҙың ҡайһы аҡыл эйәһен һайларға белмәй баштары ҡатҡан. Етмәһә, улар сит кешеләрҙе рәнйетеүҙән ҡурҡҡан. Шуға күрә һәр өйҙә, һәр аҡыл эйәһен тыңлап, ҡорамдар төҙөргә булғандар. Тик ауылда туҡһан туғыҙ йорт булһа, аҡыл эйәләре йөҙ булған. Был яңы ауыл кешеләренең ҡарарын ишетеп, аҡыл эйәләре хафалана башлаған. Нисек инде улай, тимәк, бер аҡыл эйәһенә ҡорам етмәйәсәк, ул хәйер-саҙаҡаһыҙ ҡаласаҡ бит? Килмешәктәр кемдең теорияһы иң хаҡ икәнен иҫбатлап бәхәсләшә башлаған. Яйлап был бәхәскә ауыл кешеләре лә ҡушылған. Бәхәс шул тиклем көслө булған: ауылдаштар өс йылдан һуң яланға ҡорға йыйылыу тураһында ла онотҡандар хатта!

Тағы өс йыл үткән. Ауыл тирәләй туҡһан туғыҙ мөһабәт ҡорам ҡалҡып сыҡҡан. Улар эргәһендә кешеләрҙең элекке өйҙәре йәмһеҙ һәм шөкәтһеҙ булып күренгән. Кешеләр емешлектә, йәшелсәләрҙе лә ҡарамаған, баҫыуҙар ташландыҡ хәлгә ҡалған, баҡсалар ҡороған.

Һәр аҡыл эйәһе үҙ ҡорамына бикләнеп, кешеләргә аҡыл һатҡан: "Һеҙ әле тулыһынса иманға килмәгәнһегеҙ. Хәйер-саҙаҡаны күберәк алып килегеҙ, көнө-төнө табынығыҙ".

Ҡорамһыҙ тороп ҡалған йөҙөнсө аҡыл эйәһе иһә йәшертен үҙ эшен алып барған. "Ғибәҙәтхана улай төҙөлмәй, табынғанда ла икенсе һүҙҙәр ҡулланырға кәрәк. Аллаһ менән нисек көн һайын һөйләшергә икәнен бер мин генә беләм", - тип өгөтләгән ул.

Әгәр ҙә ауылдаштарҙың береһе уның өгөт-нәсихәтенә инанһа, ауыл эргәһендә яңы ҡорам төҙөлгән, элеккеһе ташландыҡ хәлгә дусар булған. Хәҙер инде ҡорамһыҙ тороп ҡалған икенсе аҡыл эйәһе халыҡты үҙ яғына ауҙарырға тырышҡан. Шулай бик күп йылдар уҙған.

Көндәрҙән бер көндө ауылдаштар өс йылға бер йыйылған элекке ҡорҙо иҫтәренә төшөргән. Аллаһ тауышын тағы үҙҙәренсә ишеткеләре килгән.

Ауыл эргәһендәге яланға йыйылғас та, улар күмәкләп яуап таба алмаған һорауҙырын биргән: "Аллаһы Тәғәлә, әйтсе беҙгә, ни өсөн беҙҙең баҡсаларҙы ҡорт баҫты? Ни өсөн беҙ элеккеләй йыл да мул уңыш йыймайбыҙ? Ни өсөн кешеләр бер-береһе менән бәхәсләшеүҙән бушамай? Ни өсөн беҙ, күпме генә ыҙғышһаҡ та, үҙ иманыбыҙға ҡайта алмайбыҙ? Беҙ күпләп төҙөгән ҡорамдарҙың ҡайһыныһында йәшәйһең Һин?"

Кешеләр яуапты оҙаҡ көткән. Күктән был юлы күңелһеҙ, арыған тауыш ишетелгән:

- Эй, кешеләрем, мин һеҙҙе берҙәм итеп яралттым. Һеҙ берҙәм булғанда ғына илаһи хыялға ирешеп була. Ә һеҙ һәр берегеҙ, үҙ аллаһын эҙләп, айырым ҡорамдарға бикләндегеҙ. Ҡәҙерле балаларым, әйтегеҙсе, мин ҡайһы ҡорамда булырға тейеш? Бөтәгеҙҙе лә тиң күргәс, берегеҙҙе лә рәнйетмәҫ өсөн ҡайһы ҡорамды һайлайым? Һөйөү менән һайлау ирке һеҙҙең һәр берегеҙҙең үҙендә. Берҙәм ҡарарға килһәгеҙ генә хыялығыҙ тормошҡа ашыр...

Шулай тигән дә тауыш, шымған. Ҡасандыр гөл-сәскәгә күмелгән ауылда йәшәгән кешеләр иһә бөгөнгәсә бәхәсләшә. Өйҙәре емерек, баҡсалары ташландыҡ хәлдә. Ҡорамдар бейегәйгән һайын, бәхәс тә ҡыҙа бара...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сит аҡылға таянмайыҡ, тигән хәҡиҡәт был. Ә шулай ҙа... Ситтәрҙең баһалауы барыбер кәрәк беҙгә. Сөнки беҙҙең улдарыбыҙ, ҡыҙҙарыбыҙ йыш ҡына үҙбаһаһын да белмәй китә. Ә үҙбаһаһын белмәгән кеше милләтен, туған телен дә һанламай. Чернэ һымаҡ ғалимдарҙың әйткәне тап ошондай милләттәштәр ҡолағына инһә ине лә бит...**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Оҡшаған урын табығыҙ!

Күпселек донъя мәҙәниәтендә юҡҡа ғына кешенең яңғыҙ ҡалырға тырышыуын ихтирам итмәйҙәр. Америка индеецтары һәм Африка бушмендары ҡәбиләләрендә егеттәр тормоштарының бер этабында тауҙарға китә йәки саванна буйлап сәйәхәт итеп, үҙҙәренең был донъялағы тәғәйенләнеше тураһында уйлана. Барлыҡ бөйөк аҡыл эйәләре - Ғайса бәйғәмбәр, Будда, Мөхәммәт - һәм уларҙың артынан Аллаһтың хәҡиҡәтен эҙләп эйәргән миллионлаған диндар, мистик һәм эҙләнеүсе яңғыҙлыҡтан илһам ала. Һәр ҡайһыбыҙға телефон шылтырамаған, гәзиттәр, сәғәттәр булмаған, аҡса һәм проблемалар хаҡында уйларға кәрәкмәгән тыныс урын кәрәк. Һәр ҡайһыбыҙҙың - йоҡо бүлмәһе булһынмы ул, баҡсалағы креслоМЫ, урмандағы матур аҡланмы - уйланыуҙар һәм ижад мөйөшө булырға тейеш.

## Донъя картинаһы

*Ниндәйҙер бер нәмәне алырға теләп, беҙ уның йыһандағы бөтөн нәмә менән бәйле икәнлеген асыҡлайбыҙ.*
*Джон Мьюр*

XVII быуаттан фән донъяны Ньютон буйынса өйрәнә башлай. Уның ысулы: әгәр ниндәйҙер күренештең асылын аңларға теләһәң, уны өлөштәргә бүл дә, барыһын да айырым өйрән, ти. Йәғни атомдарҙан һәм молекулаларҙан электрондарға, һуңынан - кварктарға һәм мезондарға күс. Артабан инде иртәме, һуңмы, Йыһандың нисек ҡоролғанын аңларһың.

Шекспирҙың сонеттарын алайыҡ. Уларҙы исемдәргә, ҡылымдарға, алмаштарға бүләйек, һуңынан айырым хәрефтәргә тарҡатырбыҙ. Авторҙың уйҙары тураһында нимә белә алырбыҙ? Әгәр "Мона Лиза"лағы һәр буяуҙы айырым анализлаһаҡ?

Фән, әлбиттә, мөғжизәләр тыуҙыра ала, әммә был аңлау спектрының бер генә яғы. Фән нимәлер яһай. Интеллект атамаларҙы һәм күренештәрҙе тарҡата. Ә тулы картинаны айырым деталдәрҙә бары тик йөрәк менән генә күрергә мөмкин.

Донъяла яуабын мәғлүмәтлелек менән дә, ҙур аҡыл менән дә таба алмаған һорауҙар бар. Дуҫтарыңды анализлай башлап, уларҙың иң күркәм рухи сифаттарын күҙ уңынан ысҡындыраһың. Йыһанды атомдарға тарҡатып, үҙеңде уның айырылғыһыҙ өлөшө булыуыңды тойоуҙан туҡтайһың. Әммә уның кисерештәрен үҙең аша үткәреп кенә донъя менән бер һулышта булаһың һәм уны бөтөн тулылығында күрәһең. Ҡайғыртыусанлыҡ үҙеңде тиҙ арала дөйөм схемаға инергә мөмкинлек бирә. Донъяла барыһы ла үҙ-ара бәйләнгән һәм уны ни тиклем ваҡ өлөштәргә бүлергә тырышаһың, шул тиклем уның хатта төп ҡанундарын да аңламаясаҡһың.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ӨФӨ БАШҠОРТТАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**2-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Аймаҡ. Хоҙай. Химия. Һитә. Ләмәҙе. Бәйһеҙ. Иҙел. Атаман. Код. Ғаләм. Силәбе. Мәмләкәт. Вернисаж. Танк. Лена. Трап. Афәт. Имам. Азат.
**Вертикаль буйынса:** Байконур. Һөйөндөков. Әхмәр. Хәйҙәр. Натрий. Ғәм. Мөхәмәҙиева. Алпама. Яхина. Кәже. Хәйбуллина. Сталактит. Атлант. Әгләм. Ейгән. Ебәк.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Февраль (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5 (19) дүшәмбе | 7:31 | 9:01 | 13:30 | 16:30 | 18:00 | 19:30 |
| 6 (20) шишәмбе | 7:29 | 8:59 | 13:30 | 16:32 | 18:02 | 19:32 |
| 7 (21) шаршамбы | 7:27 | 8:57 | 13:30 | 16:34 | 18:04 | 19:34 |
| 8 (22) кесе йома | 7:25 | 8:55 | 13:30 | 16:36 | 18:06 | 19:36 |
| 9 (23) йома | 7:23 | 8:53 | 13:30 | 16:38 | 18:08 | 19:38 |
| 10 (24) шәмбе | 7:21 | 8:51 | 13:30 | 16:40 | 18:10 | 19:40 |
| 11 (25) йәкшәмбе | 7:19 | 8:49 | 13:30 | 16:42 | 18:12 | 19:42 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ғинуар айында тыуған көндәрен билдәләүселәрҙе - **Әбйәлил районы** Ишҡол ауылынан Зифа Ҡадирова, Әбдрәш ауылынан Сара Абдуллина, Юлдаш ауылынан Рәсимә Баймырҙина, Атауҙы ауылынан Кәримә Әбсәләмова, Маһинур Ямалетдинова, Асҡар ауылынан Сәхипъямал Усманова, **Ҡырмыҫҡалы районы** Ибраһим ауылынан Рәмил Ғәлиев, **Әлшәй районы** Ҡармыш ауылынан Миңлейән Ғәбделмәнов, **Ғафури районы** Красноусол ауылынан Вилдан Шәрипов, **Баймаҡ районы** Ҡолсора ауылынан Әмир Һамарбаев, Айһылыу Сынғыҙова, **Ауырғазы районы** Төрөмбәт ауылынан Урал Ибраков, **Күгәрсен районы** Яҡшембәт ауылынан Альмира Аллағыуатова, **Ишембай районы** Ураҙбай ауылынан Фәниә Йәмилова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ!

Һеҙгә ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, ғаилә бәхете, эшегеҙҙә уңыштар теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3 февраль "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия 16+
**4 февраль "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+
**6 февраль "Әҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама 12+
**7 февраль "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт 12+
**8 февраль "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+
**9 февраль "Аҡ пароход"** (С. Айытматов), драма 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**3 февраль "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+
**6 февраль "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр
**9 февраль "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**3 февраль "Дюймовочка"** (Г.-Х Андерсен) 0+
**4 февраль "Кот в сапогах"** (Н. Шувалов) 0+
Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00
**3, 4 февраль "Принцесса Крапинка"** (А. Шмидт) 0+. Башлана 16.00

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**5 февраль** Башҡортостандың халыҡ шағиры **Назар Нәжмиҙең** тыуыуына - 100 йыл 6+
**8 февраль "Ел тыуҙырған моң".** "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө, Башҡортостандың халыҡ уйын ҡоралдары оркестры, филармония артистары ҡатнаша.

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**3 февраль "Катын түгел - аждаһа!"** (Д. Сәлихов), комедия 12+
**4 февраль "Оркестр - кто в нем живет?"** 6+. Башлана 12.00
**9 февраль "Көйһөҙ кейәү"** (Н. Гоголь), комедия 16+

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## СТӘРЛЕЛӘР ӨФӨГӘ КИЛӘ

**Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры Өфө сәхнәһендә сығыш яһаясаҡ. Гастролдәр 26-28 февралгә билдәләнгән.**

Өфө тамашасыһы иғтибарына "Катын түгел - аждаһа!" (Д. Сәлихов) комедияһы, Н. Гоголдең "Көйһөҙ кейәү"е, М. Кәримдең "Өс таған"ы тәҡдим ителәсәк. Был спектаклдәрҙең һәр береһе үҙенсәлекле. Мәсәлән, "Өс таған"да малайҙарҙы ике быуын - мәктәп уҡыусылары һәм театр актерҙары уйнай. Малайҙарҙың һәм өлкән ирүҙамандарҙың донъяға ике төрлө ҡарашы, авторҙың тәрән фәлсәфәһе, дуҫлыҡ һәм изгелеккә ышаныуҙың бөтөн ҡаршылыҡтарҙы ла енеүе Мостай ижадын яратыусылар өсөн генә түгел, барыһына ла оҡшаясаҡ.

Өфө урман-техник техникумы Нәбиуллин Рәжәп Байгондо улының ҡәҙерле әсәһе

**Мәғиямал Мөхәмәт ҡыҙының**

вафат булыуы сәбәпле, уның һәм уның яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МУЗЫКА ТУЛҠЫНЫНДА...

## бергә йөҙәйек



**Беҙ юғары технологиялар һәм компьютерҙар осоронда йәшәйбеҙ. Нимә кәрәк - барыһын да интернет селтәрҙәренән табырға күнеккәнбеҙ. Кеше шул тиклем виртуаль донъяға башы-тояғы менән сумған. Балалар һәм үсмерҙәр ҙә үҙҙәренең бөтә буш булған һәм буш булмаған ваҡыттарын компьютер алдында үткәрә.**

Был проблеманы хәл итеү өсөн ата-әсәләр төрлө саралар күрә. Улар балаларын төрлө түңәрәктәргә, мәҙәни сараларға йөрөтөргә тырыша. Әммә кескәйҙәрҙе йыр-моң аша донъяның матурлығын күрергә, уның менән һоҡланырға өйрәткән, сәнғәткә һөйөү уятҡан, бәпес көткән ҡатындарҙың физик һәм психик талаптарына яуап биргән тамашалар республикала юҡ кимәлендә. Тап ошо хатаны төҙәтеү маҡсатында Башҡорт дәүләт филармонияһы биш йыл элек ауырлы ҡатындар һәм өс йәшкә тиклем балалары булған ата-әсәләргә тәғәйенләнгән "Музыканы бергә тыңлайбыҙ" проектын аса. Быйыл ул үҙенең тәүге бәләкәй генә юбилейын билдәләй. Ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә проект сиктәрендә тамашасыларға дүрт йөҙҙән ашыу концерт тәҡдим ителгән. Тәрбиәүи маҡсаттарҙа ойошторолған тамаша буласаҡ әсәләрҙең психологик һәм эмоциональ торошона ыңғай йоғонто яһай, уларҙа сәнғәткә һөйөү уята. Бынан тыш, киләсәк быуынды тәрбиәләйәсәк әсәләрҙең эстетик зауығын үҫтерә.

Юбилей миҙгелендә проектты "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө асыуы ла осраҡлы түгел. Сөнки уларҙың төрлө милли халыҡ ҡоралдарында башҡарылған заманса эшкәртелгән көйҙәре тамашасыны ниндәйҙер сафлыҡ һәм тыныслыҡ донъяһына илтә. Ҡурай - тылсымлы музыка ҡоралы. Уның аша беҙ ябай ғына көйҙәр ишетеп ҡалмайбыҙ, ә моң аша халҡыбыҙҙың сал тарихын, тыуған яғыбыҙҙың матур бай тәбиғәтен һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен күҙ алдына килтерәбеҙ. Киләсәк быуын өсөн был үтә мөһим. Был проект балаларҙа кешелек сифаттарын асырға ярҙам итә. Бынан тыш, уларға тәрбиәле, саф күңелле итеп үҫергә лә ярҙам итә, тигән фекерҙә төркөм етәксеһе Ринат Рамаҙанов.

Ғалимдар әйтеүенсә, В.А. Моцарттың, А. Вивальдиҙың, Л.В. Бетховендың, И.П.Чайковскийҙың, шулай уҡ халыҡ көйҙәре, йырҙары ҡарындағы балаларҙы тынысландыра, уларҙы физик һәм рухи яҡтан үҫтерә. Балаға ниндәйҙер әҙәп-әхлаҡ нормалары һалыр алдынан ата-әсәнең үҙенең ниндәйҙер кимәлдә тәрбиәле булыуы зарур. Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр, ти бит халыҡ мәҡәле. "Музыканы бергә тыңлайбыҙ" проекты һәр шәмбе тамашасыларҙы филармонияның Орган залында ҡаршылай. Киләһе концерттарҙа Олег Ҡасимов етәкселегендәге Джаз ансамбле, Лидия Фоменко һәм уның уҡыусылары "Тылсымлы флейта" программаларын тәҡдим итәсәк.

**Эльнара ШАФИҠОВА.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

***85. Рәшит Назаров "Әҫәрҙәр".*** Ике томдан торған йыйынтыҡтың беренсеһендә Рәшит Назаровтың шиғырҙары һәм мәҫәлдәре йыйылған. Был шағирҙың үҙенсәлекле шиғриәте менән танышырға саҡырам. Рәшит Назаровтың ниндәй шиғырын beләһегеҙ, тигән һорауға, моғайын, бөтәһе лә уның билдәле "Мөхәббәт" йә "Йөрәк" шиғырҙарын атар. Сөнки тап ошо шиғырҙары мәктәп программаһына индерелгән. Ә шағирҙың киң публикаға билдәһеҙ тағы ла бихисап үҙенсәлекле шиғри юлдары бар һәм улар тап ошо ике томлыҡ китапта тупланған. Күңеленән урғылып сыҡҡан хистәрен дәртле йыр юлдарына әйләндерә ул:

*"Бәлки, ул йыр матур түгелдер ҙә...*
*Тик барыбер бөтә йөрәктән.*
*Ә йөрәктең һүҙе - ҙур һүҙ беҙҙә,*
*Тормош үҙе шулай өйрәткән".*

***86. Мөнир Ҡунафин "Йөҙөп барған, ти, аттар диңгеҙҙә" повесы.*** "Мөнир Ҡунафиндың "Йөҙөп барған, ти, аттар диңгеҙҙә" повесын айырыла алмай бер тынала уҡып сыҡтым да ҡыуаныстан иланым. Геройҙарҙа ауылдаштарымды ла таныным. Автор ауыл кешеләрен шул тиклем ихлас итеп күрһәткән. Заман болғанышында диңгеҙҙәге аттар кеүек йөҙөп барғанда төшөнкөлөк баҫып киткәндә күңел йыуанысын "йәшел йылан"да күрә бит улар. Әгәр ҙә Фәнилде нахаҡҡа ғәйепләп ултырып, бар ауылдары менән яҡлап ҡалмаһалар, эскелек һаман да дауам итер ине. Әле улар алдында яңы тормош. Улар барыһын да аңлағандыр һәм бәхеттәрен үҙҙәре ҡорор, тип шул тиклем ышанам. Халыҡ, бигерәк тә ауыл кешеләре, ошо повесты уҡып, фәһем алһын ине. Замандаштарыма күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән саҡтарҙа мотлаҡ ошо әҫәрҙе уҡырға кәңәш итәм", - тип яҙа Айгөл Иҙелбаева.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә **"#башкитап"** хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАҘАР ҠИММӘТ БУЛҺА...

## һатыусынан оят ҡаса

Баҙар ҡиммәт булһа, һатыусынан оят ҡаса, баҙар арзан булһа, алыусынан оят ҡаса.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бер аҡһаҡалдан: "Ни өсөн йыланды аҡыл символы тип йөрөтәләр?" тип һорағандар. "Сөнки ул хәҡиҡәт кеүек әсе саға", - тип яуап биргән аҡһаҡал.

**(Су Дун-по).**

Бер кешегә ҡарағанда, бер төркөм кешене алдауы еңелерәк.

**(Кароль Бунш).**

Һинең нимә һөйләгәнең, айырыуса икенсе бер кеше тураһында нимәләр әйткәнең үҙең хаҡында ла бик күпте һөйләй.

**(Поль Валери).**

Үҙең турала насар һөйләмә - кешеләр шаяртыуҙы аңламай.

**(Януш Васильковский).**

Шаңдау менән һүҙ көрәштермә: һуңғы һүҙ барыбер уныҡы буласаҡ.

**(Рамон Гомес).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ батшаға ҡарсыға ҡошсоғон тотоп килтерәләр. Батшаның хеҙмәтсеһе ҡошсоҡто тәрбиәләп үҫтерә, ләкин осорға өйрәтә алмай. Ҡарсыға ҡошсоҡ сағында уҡ ҡундырылған ағас ботағынан айырылырға теләмәй, тик кенә ултырыуын белә. Батша йыш ҡына хеҙмәтсеһенең башҡа ҡоштарҙы осорға өйрәтеүен, ә был ҡарсығаны урынынан ҡуҙғата алмай яфаланыуын тәҙрәнән күҙәтеп ултыра. Хеҙмәтсеһен йәлләп китә бер саҡ батша һәм илгә хәбәр ебәрә: кем дә кем ҡарсығаны осорға өйрәтә... Иртәгәһенә иртән тәҙрә аша ҡарсығаның осоп йөрөгәнен күргән батша был мөғжизәне тормошҡа ашырған кешене эргәһенә килтерергә бойора. Бер крәҫтиән икән ул. "Һөйлә, һин нисек ҡарсығаны осорға мәжбүр иттең?" ти уға батша. "Уның бер ауырлығы ла булманы, батшам, - ти крәҫтиән. - Мин ҡарсыға ултырған ботаҡты бысып ташланым. Шунда ҡарсыға үҙенең ҡанаттары барлығын аңлап, осоп китте..."**

**Ә бит кешеләр ҙә шулай. Берәүҙәр үҙҙәрендә ҡанат барлығын белмәй, ултырған ерендә ултыра бирә. Тормош ошо ғәҙәт ботағын һындырып ташлаһа ғына улар ҡанаттары барлығын иҫкә төшөрә һәм осоп китә. Икенселәренең бөтөн нәмәһе бар, улар бына шул булғанды юғалтырға теләмәй, бер урында ултыра ла ултыра. Бәлки, улар ултырған ботаҡты ла бысырға кәрәктер, улар ҙа осоуҙың ни икәнен татып ҡарарға тейештер бит? Ҡайһы саҡта тәүҙә бик насар булып тойолған көтөлмәгән ваҡиғаларҙың да осоу мөмкинлеге биреүе ихтимал бит. Осайыҡ!"**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Милəүшə ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 2 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 180/02